**Салауат Юлаевтың тыуыуына 250 йыл тулыуға ҡарата**

АҪЫЛҒУЖА БАҺУМАНОВ

# Салауаттың йәше



*Салауатыбыҙ тураһында ҙур әҫәр яҙырға 1972 йылда уҡ тотонғас, мәғлүмәттәр йыйғас, аптыраллы, сөнки халҡыбыҙҙың XVIII быуаттың икенсе яртыһындағы тормошон һәм азатлыҡ өсөн көрәшен идеологик ҡалыптарға һыйҙырырлыҡ түгел ине. Үҙгәртеп ҡороу елдәре иҫкәс, иркен тын алынды. «Салауаттың йәше» романында башҡорттарҙың ғына түгел, ә тотош Евразия халыҡтарының да тормошо бер аҙ сағылыш таба. Этностар бер-береһе менән аралашмайынса йәшәмәй ерҙә, шуға ла үҙ-ара мөнәсәбәттәрҙе күрһәтеү ҙә бик мөһим. Әҫәрҙең нигеҙендә тарихи хәҡиҡәт ята. Әйтәйек, атаҡлы полководец Суворов пугачевсыларҙы ғына түгел, аҙаҡ ҡаҙаҡтарҙы ла ҡаты ҡырған икән — был фактан нисек ҡасаһың?!*



*Әҫәргә бирелгән исем, минеңсә, бигүк уңышлы булмаһа ла халыҡтың йәшенә лә, илауыҙарына ла ишара яһай. Ысынлап та, империяны дер һелкеткән һуғышта крәҫтиәндәр, хатта казактар ҙа түгел, бәлки башҡорт атлылары төп ролде уйнағанлығын сағылдырҙым.*

*«Ватандаш» уҡыусыларына әҫәрҙең беренсе китабынан тәүге бүлекте тәҡдим итеүемә шатмын.*

***Автор.***

## Беренсе бүлек

### 1

Аҡ яурын сал бөркөттө һағайтты нимәлер. Ҡаялағы һикәлтәлә көмөрәйеп ҡунаҡлаған еренән ҡалҡына биреңкерәгәндәй итте лә, килбәт-ҡиәфәтенә ажрай төҫ сығарып, башын һапалы борғоланы. Әүәл эргә-тирәһен байҡаштырҙы: тәпәшле-бейекле тауҙар араһында ла, текәле-һөҙәкле армыттарҙа ла һиллек. Ҡараштарын түбәнгә, ҡаршыһындағы киң типһәнлеккә, төшөрҙө. Унда ла тып-тыныс. Арыраҡ, йылға үҙәненә яҡын урында, тош-тош ултырған тирмәләр, зөбәржәт балаҫ өҫтөнә арлы-бирле тәгәрләтелгән аҡһыл-һорғолт, буҙ таштарҙай, ауалаған ҡояшта ҡыҙына. Тегенән-бынан шыйыҡ ҡына күгелйем төтөн һайғауҙары һиҙелер-һиҙелмәҫ бәүелеп күтәрелә, аҡһыл-зәңгәр бушлыҡта иреп юғала. Күктәрҙә лә — тынлыҡ.

Бөркөттөң тирмәләр араһында һанда-һаяҡ күренгеләгән кешеләрҙә гәме юҡ. Йылға бөгәленә ҡарай ат юрттырған ике һыбайлыға ла битараф ҡалды ул. Ҡараштарын тағы ла алыҫыраҡ, шыр урман өҫтөнән йөртөп алды... Юҡ, хәүефхәтәр һиҙҙерерҙәй һис ни ҙә юҡ, диҡҡәтте үҙенә тартырҙай хәрәкәтмаҙар тойолмай. Шулай ҙа ҡайҙалыр — хатта бөркөт ҡараштары ла етмәҫ ерҙәрҙә, ахырыһы, — нимәлер бар.

Бөркөт, алға иңкәйеңкерәп, ҡанаттарын тарбайтты ла таш һикәлтәһенән ысҡынды, талғын ғына осоп китте, саңҡыуы ҡаяларға ҡағылды:

— Ҡйыңҡ-ҡйыңҡ-ҡйыңҡ!

Типһәнлекте бер әйләнде бөркөт, ҙурыраҡ дүңгәләк яһап ике әйләнде, шунан тауҙар ашаһында ятҡан алыҫыраҡ яҡтарҙы — үҙе һунар итергә яратҡан тарафтарҙы — байҡаштырырға китте. Унда ниндәйҙер ғиллә бар һымаҡ. Йәйелеп, яй ғына осто. Саңҡыуы тоноғораҡ ишетелде:

— Ҡйыңҡ-ҡйыңҡ-ҡйыңҡ!

Ҙур туғайлыҡтың урман яғындараҡ, иләүендә ҡуҙғыған ҡырмыҫҡаларҙай, аттар өйөрөлөшә, ә тауҙар итәгенә тартҡан иркенлектә ике айғыр үҙ-ара һуғыша. Бындай хәлдәрҙе хәтһеҙ ғүмере эсендә күргәне бар бөркөттөң. Осратҡанында тамаша ҡылырға әүәҫ. Әле лә, тар түңәрәк әйләнәһе буйынса талғын йөҙөп, һуғыш суҡмарҙарын ҡыҙыҡһынып күҙәтте.

Айғырҙың кир төҫтәгеһе йәш икән, бик айбарлы, ҡыҙыу күренә. Олоһо, сантары, көндәшенән көслөрәк, нығыраҡ тойолғандай. Етмәһә, тәжрибәлерәк. Еңеү уның яғында булыр, шәйт.

Бейәләрҙең хафалы ҡоршолдашыуынан, өйөрөлгән урындарында сабырһыҙ тубырлашыуынан, көндәштәрҙең сыйнай-хорхолдай тешләшеүенән, шаҡ-шоҡ типкеләшеүенән дөйөм бер дәһшәтле шау хасил. Ошонан бөркөт тә тынысһыҙлана, дүңгәләге буйынса шәберәк кәйелә башлай; саң-туҙан менән бергә һауаға күтәрелгән ҡырҡыу тир еҫе уны хушһындырмай, шуға ла әйләнешен йәнә киңәйтеңкерәй.

Даһыр-доһор килә айғырҙар. Ана, үрәпсешеп, тырнашҡандай иттеләр ҙә муйын-һайындарын тешләшмәккә аҙапландылар. Әҙерәк уралтынышып йөрөй-йөрөй арт ҡуйыштылар бер мәл — ибәтәйһеҙ тибешкәндәрендә тояҡтары ярылыр сиккә еткәндер. Бына баҫтырышырға тотондолар: тәүҙә олоһо — саптар — ҡасҡан булды, үҙе һөжүм итеү өсөн уңайлы мәлде һағаланы; шунан кир төҫтәгеһе ошондай уҡ алым менән көндәшенең хаталаныр яйын аңдыны.

Йәш айғыр етеҙерәк шул — алданы аҫауҙы: ҡасып барғанында ялтаныбыраҡ киҫә туҡтаны ла саптарҙың алғы уң ҡулбашына шундайын килтереп типте — һылтыҡлап-һылтыҡлап китте быныһы. Мәрҙәс-мәрҙәс, кир айғыр! Бөркөт, түҙемһеҙләнеп, ҡанаттарын елберләтә елпеп ҡуйҙы... Ҡара һин уны — өлкәне лә тапты бит әмәлен! Бәләкәй генә уңышынан маһайыбыраҡ китеп иғтибар юғалтыуы булды — бәрҙе тегеңә саптар артҡы аяҡтары менән бер юлы! Сыйылдата бәрҙе! Юҡ, ҡайһыны еңерен ҡапылғара тоҫмаллауы ҡыйын хәҙер — бына ҡайҙа ул алыштың ҡыҙығы!

Айғырҙарҙың арығанлығы һиҙелмәй, шулай ҙа үтә тәүәккәлләп тә һөжүм итешмәй башланылар. Бербереһен тамам арытырға самаланылармы — бәстырышыу китте. Алыш һүҙылырға оҡшай, тимәк. Быныһы бик ҡыҙыҡ түгел инде, һәм бөркөт өҫкәрәк күтәрелде лә ситкә кәйелде, ҡырҙараҡ күҙгә берәй диҡҡәт йәлеп итерҙәй нәмә салынмаҫ микән тигәндәй, ҡараштарын алыҫҡараҡ йүнәлтте, ләкин ул-был шәйләмәне. Уның ҡарауы түбәндәге хәл аңлайышһыҙ ҡырҡа үҙгәрҙе.

Саптар әллә ни арала көндәшен елкәһенән умыра эләктереп алған да ысҡындырмай ынйытты. Саҡ ҡотолоп, кир битләү үренәрәк, ағасташ араһына сигенде — яңы һөжүм өсөн уңайлыраҡ урын биләмәк тә булғандыр йә. Өлкән айғыр иһә ужарланып бәстырҙы быны, ошо тирәнән бөтөнләй ҡыуып ебәрмәк ине уйы. Янларға маташҡанында, кир айғыр ҡырҡа түбәнгә ҡарай тартылды, ләкин көтмәгәндә һөрләктө, имәнес айғылдап ебәрҙе лә тәкмәсләп барып төштө, аяҡтары тарбаҡай килде. Саптар иһә аптырашынан ултыра төшөбөрәк шып туҡтаны, сал ялбыр ялын туҙғыта-туҙғыта, уҫал тышылдап ер сапсырға кереште: тегенең ҡотон ахырынаса ала, йәнәһе. Алдында һул ҡабырғаһына әйләнеп ятҡан көндәше ҡалҡынырға ла уҡталмағас, ҡыҙғаныс кешнәп тә ҡуйғас, аҫау уға бөтөнләй яҡын барҙы: юҡ, гәйрәт еҫе аңҡытмай кир, ауыр һулап, күҙҙәрен таҫырайтып тик ята. Саптар уның ҡолағы төбөнә моронон һаҡ ҡына терәне һәм шул килеш берауыҡ торҙо. Үҙенсә: «Миңә тиң алыштың, һинән киләсәктә яҡшы өйөр башлығы сығыр ине. Ҡазанда гәйебем барҙыр — кисерә күр!»— тинеме икән?

Быға тиклем ошондай һуғыштарҙа еңгәнендә саптар, муйынын ғорур дуғаландырып, текә баҫып, тантаналы кешнәп, алыш майҙанын бер урап сығыр ине; әллә ҡайҙан уның өйөрөнә юлыҡып, алты-ете бейәһен айырып алмаҡҡа яҫҡынған ырғымбыйҙың арт һабағын уҡытҡанына сикһеҙ ләззәтләнер ине; хатта һылыуҡайҙарының берееһенә ятып та ала торғайны... Әле һис улай итмәне өйөр башлығы.

Шымтайышҡан аттарҙы сөмсаф йәшел туғайлыҡта ҡалдырып, фажиғә урынынан ҡырға осоп китте — йөҙөп китте күк диңгеҙенең батшаһы. Саңҡыуы нисектер шомло яңғыраны:

— Ҡйыңҡ-ҡйыңҡ-ҡйыңҡ!

## 2

Тирмә ауыҙында тып итеп ҡалған малай — тумалаҡ ҡына, алты йәштәр самаһындалыр — хәбәренә сәсәне:

— Саа... ат... ай...

Йән-фарман йүгермәһә лә булыр ине. Ашъяулыҡ алдында ултырған ҡатын, буш каса эләктерә һалып, сәй яһарға тотондо. Ир кеше, тубығы аша һалынған таҫтамалға ҡулын һөрткөләп, мәрәкәләне:

— Атайың юҡ мында!

— Ағай тим бит! — Малай, тәгәрләгән һымаҡ итеп килеп, ашъяулыҡ ситенә йөгөнөкләне, һонолған һауытты ҡарһаланып төп күтәрҙе, тауышына етдилек, мөһимлек бирергә тырышып әйтте:

— Атай саҡыра! Йәһәт тей...

Ағаһы яурын да һелкетмәне, сәй һемерә-һемерә, ҡустыһына һалҡын ит турамдарына үрелергә ымланы. Ҡатын да туҫтаҡты шылдырып әйҙүкләне:

— Ҡапҡыла аҙыраҡ. Маҡтап йөрөйһөң икән.

— Әй, ашағы килмәй ҙә, эске килә. — Малай касаһын еңгәһенә һонодо, үҙе ағаһын тағы ҡабаландырҙы:
— Оҙаҡтама инде, атай әрҙәр.

— Нимәгә икәнен әйттеме?

— Юҡ шу... Тиҙ киһен, үҙең дә шәп йөрө, тине.

— Ништәп һыбай саптырманы һуң?

— Мынау ғына араға ат ыҙалап, тей.

— Миңә лә ат ыҙаламаҫҡа инде, әләйгәс. Хәҙер икәүҙән тороп йүгерербеҙ. Атай беҙгә Йүгерек батыр исеме бирер...

— Бирҙе һиңә! Ҡолаҡты бормаһа...

— Борһа борор — старшина бит.

Иренең бала менән булашыуы ҡатындың теңкәһенә тейҙе, шикелле. Баҫынҡы ғына әйтә ҡуйҙы:

— Анау сәйәхәтсе ғалимдар тигәнегеҙ килеп еткәндер. Бара һал, Салауат.

Малай, һыуһын ҡандырып, тышҡа йүнәлгәйне. Салауат та сығырға йыйланды, бисәһенең фаразын яуапһыҙ ҡалдырҙы, шулай ҙа һүҙен әйтте:

— Рамаҙанды һылтау итеп, ҡәйнәңдәр яғына барып ура тораҡ. Ҡәйнешеңде йәнә йүгертмәһендәр.

Иңкәйә биреберәк сыҡты ла Салауат һынын турайтты. Буйға тәпәшәк, ләкин кәүҙәгә бик ныҡ йәпйәш ир — егет кенә әле — тауҙар яғына, Һарыҡондоҙ йылғаһы үре тарафына баҡты, атаһының бынан саҡырым самаһы алыҫлыҡтағы йәйләүенә ҡараш ташланы, шунан ҡустыһына күҙ төшөрҙө.

— Ҡарале, ҡандай матурлыҡ! Көн ултырҙы бит, ниһайәт.

Тумалаҡ малайҙың көн матурлығында ғәме юҡ, ағаһы эйәр күтәреп сыҡҡас, балҡып китте, эргәләге арба аратаһына теҙгене бәйле бүртәне ысҡындыра һалып килтерҙе…

Береһе туры, икенсеһе күк юрғаларҙы етәкләгән Юлай старшина киң йылмайып һаулашҡан улының сәләменә баш ҡына ҡаҡты, ыҡсым ҡырма һаҡалын семеткеләп, ҡалын тауышын күтәрмәй һуҡранды:

— Ней бызмырҙаның? Тирмәләреңде минекенән алыҫ ҡорҙортоп… Ҡапыл кәрәккәндә бала йүгерттереп…

— Әй атай, һөрәндәр инең. Һинең көр тауыш өсөн алыҫ арамы ней?! — Салауат шаярмаҡ иткәйне лә, атаһының ҡамсы һабы менән итеге ҡуңысын һуҡҡылауынан әңгәмәнең ҡыҫҡа, ашығыс, етди буласағын аңғарып, һорай һалды: — Нимә бойораң, атай?

Салауаттың аты өҫтөндә ҡалған кесе улына Юлай үҙ юрғаларының теҙгендәрен тотторҙо ла ситкәрәк китте, иҙеүен ысҡындырҙы, түбәтәйен төҙәткеләп ҡуйҙы.

— Ана, Айытбайҙы алып, — ҡамсыһы һабын старшина аш тирмәһе яғына төрттө. Уның алдында Юлайҙың оло ҡатыны менән буйсанырак бер егет мәж киләләр — юл хәрезе хәстәрләйҙәрҙер. — Ҡобау сығам. Ер һатып яталармы, һатҡандармы — иртәнсәк урман-күҙәйҙәрҙән берәү ҡолаҡҡа тишеп китте, асығын белмәй. Һуң булмаһа, арҡыры төшөргә иҫәп. Өфө етеп ҡайтырға ла тура килер.

Салауат, түҙмәй, һүҙ ҡыҫтырҙы:

— Ништәп мине алмайың? Әүбәкер беләме?

— Шым! Һөйҙәп бөткәндә көт! — Юлай йәнә итеге ҡуңысын тынғыһыҙланы. — Айытбай ҙа еткән. Бисергә юрый әйттермәнем, файҙаһы үҙе хәтте. Һиңә әмер шул: күҙ-ҡолаҡ тор йорт-илгә, өс-дүрт көнһөҙ ҡайтылмаҫ. Тағы: теге сәйәхәтселәрҙең бер төркөмө Эҫем зауытына килеп еткән, тей. Ҡатау барышлай беҙгә лә һуғылырҙар. Бик осрашҡың килә ине шулар менән — теләгеңә ирешерһең. Кәрәкһә, ат алмаштырырға, көймәләрен йүнәтергәме йә юлмаҙар рәтләргәме — ҡушҡаммын, һин ҡараштырып тор.

— Быларҙы ғына, атай, ярҙамсың да, сотнигың менән писарың да атҡарыр. Юлға ал мине лә! Питербур сәйәхәтселәрен күрергә өлгөрөрмөн, улар Уралды артылғансы. Ғалимдарҙы беҙгә оҙатып йөрөргә ҡушылмаған даһа. — Атаһы өндәшмәгәс, Салауат тағы ныҡышты: — Ал мине! Ҡобауҙа Әбдрәшитте лә күрергә кәрәк. Һуң, ер һатыу менән бәйҙе ыспурҙарҙа тешем төшкән бит минең дә. — Салауат көлөп ебәрҙе, сөнки өҫкө бер теше ысынлап та юҡ ине уның. — Ике яҙыу таныуымдың да файҙаһы тейеп ҡуйыр…

Юлай ҙа көлөмһөрәне, ләкин өндәшмәй ҡалды. Шул арала ҡан ерән төҫтәге тыу бейәһенә атланған, ҡанъяғаһына тоҡсай-маҙар аҫҡан Айытбай килеп етте, күкрәктән сыҡҡан матур тауышы менән өндәште:

— Булды, түрә! Арыумы, ҡорҙаш!

Ҡаҡса кәүҙәле, аҫҡаҡ йөҙлө был егет старшинала денщик хеҙмәтен үтәй, быҒаса Юлайҙың йылҡыһын ялланып көткәйне. Һунарсы Әбделкәримдең бөртөк кенә улы Айытбай, атаһы һымаҡ, ауға һәм ҡурай тартырға шәп, әсәһе кеүек һәйбәт кенә бейей ҙә. Ата-әсәһенән айырмалы, эшкә, донъя көтөүгә әүәҫ тә, әрһеҙ ҙә үҙе. Егәрле ошо егеттең бер килеп, ун алты йәшенә сыҡҡанында, бар әҙәмде хайран ҡалдырып, тауышы

асылып китмәһенме! Уғата моңло, көслө тауышы, күңелдәрҙе башкөлләй сихырлар аһәңе менән, кем әйтмешләй, «үлтерә лә ҡуя инде» бына! Оҫтарып, маһирланып китте Айытбайың, даны шайтан-күҙәйҙәр иләүенән ҡырға ла тарала башланы. Элекке йыл ҡышҡыһын әллә ҡайҙа — Уралдың көн бите яландарында ятҡан Мәкәтин иләүенең старшинаһы Баҙарғол депутат, Өфөгә барышлай, Юлай дуҫының ауылына һуғылып тыңланы көтөүсене; ҡайтышлай, өс көн ятып хозурланды, йырсының иңенә затлы ҡама тунын ябып китте. Былтыр көҙ Әй буйыныҡылар алып ҡайтты үҙҙәренә быны: аҙна-ун көн ауылдан-ауылға ҡунаҡҡа йөрөтөп, саналы ат биреп, артына һарыҡ һалып, йәнәшенә кәләш ултыртып, һыбайлы ҡайнаға-ҡәйнештәре оҙатыуында килтерҙеләр кире. Бүләк-килен алтын тауышлы Айытбайын көнләшеп кәмһетмәһә лә ҡабат ҡырға яңғыҙ йөрөтмәне, иренең йорт-ҡаралты, мал-тыуар әхүәлдәрен тиҙ арала ҡулға ла алды — сымыры ғына шул...

Салауат йырсы ҡорҙашы менән ҡушҡуллап күрешкән арала сығарҙы хөкөмөн Юлай:

— Ярар, әләйгәс, киттек беҙҙең менән, улым. Ҡуҙғала һалайыҡ. Сотникка тейеп үтер кәрәк...

Ултырыша һалып доға ҡылдылар ҙа менгеләренә атландылар, Юлайҙың аш тирмәһе алдында ҡул ҡаушырып өнһөҙ ҡарап ҡалған бисәләренә баш ҡына ҡаҡтылар. Старшинаның тумалаҡ малайы ғына быларҙың артынан йүгереңкерәй биреп барҙы ла ҡул болғаған булды, ҡапыл туҡтап, башын күккә сөйҙө. Ҡайһы тарафтандыр бөркөт саңҡыуы яңғыраны:

— Ҡйыңҡ-ҡйыңҡ-ҡйыңҡ!

### 3

Сыңҡ-сыңҡ-сыңҡ!

Һандалда баҙрап ятҡан тимергә шундайын килтереп һуға ул — сәсрәгән бихисап осҡондары күҙгә биткә энәләй ҡаҙала. Башын ситкә борорға итә, ләкин аяуһыҙ яҡтылыҡтан ҡараштарҙы ҡасырыр әмәл юҡ. Етмәһә, ныҡ һыуһатҡан. Кипкән ирендәрен ҡытыршы теле менән яларға маташа — файҙаһыҙ. Эҫелектән тәҡәт ҡорой. Хәҙер тимер генә түгел, һандал үҙе лә ҡуйы ҡараҡыҙыл төҫкә инде, хатта-хатта ҡулындағы сүкеше лә ялҡынланып янғандай...

Уянды Леонтий. Йөҙөнә туптура төшкән ҡояшты ҡапларға усын һонмаҡсы итте — ҡулы күтәрелмәйсе. Ипләп кенә ҡалҡынып ултырҙы ахырҙа. Ятҡан урыны — сусаҡ таштарҙың рәт-рәт теҙеме араһы, ологара тауҙың биленән түбәндәрәк. Ятаҡ өсөн йә ағас ботаҡтарын, йә ошондай бейегерәк ерҙе һайлай Леонтий, эт-ҡоштан, кеше-маҙарҙан һаҡланмаға инде йоҡоһонда.

«Был көндө лә имен-аман ҡаршыланыҡ. Слава те, hосподи!»— тип уйланы Леонтий, суҡыныр ниәттән уң ҡулын маңлай тәңгәленә күтәргәйне лә тәре һынландырмайынса кире төшөрҙө. Хәтеренә элек-элек бүтәнсә ғәмәл иткәне килде, ҡуйы шырт һаҡалын һулаҡай усы менән һыйпаштыра-һыйпаштыра, ян-яғына күҙ йөрөттө. Һәр тарафта ла аяҡлы йән әйәләре барлығы тойолмай-күренмәй, аҫтараҡ — яҡын урманлыҡта — ҡош тауыштары ла һиллекте боҙмай. Өҫтә, бик бейектә, яңғыҙ бөркөт йөҙөп йөрөнө-йөрөнө лә, саңҡып, ҡаялар артына инеп юғалды.

Һыу! Иң әүәле тамаҡ сылатыр кәрәк! Леонтий моҡсайын һәрмәп алды, билендәге ҡынлы бысаҡты ҡапшаны, тороп киреләде. Ойоған ҡулбаштарын ыуғылап, ян-яғына ҡарана-ҡарана аҫҡа төшөп китте. Ҡуйы ағаслыҡ араһынан күңелле селтерәп аҡҡан кескәй генә шишмәгә тиҙ барып юлыҡты ул. Ҡуш услап, рәхәтләнеп эсте йән кинәндергес һыуҙы. Бит-һәтен, муйынын йыуып ләззәтләнде. Ситкәрәк күсеп, ҡороҡ ергә ултырҙы ла моҡсайын систе, унан ҡатҡан икмәк киҫәге алып, суҡынып ҡуйҙы.

— Брат! Эй, браток!

Шыбырлабыраҡ әйтелгән был һүҙҙәр аяҙ көндә йәшен атҡандай яңғыраны — Леонтий ырғып торҙо ла бысағына йәбеште.

— Браток, не бойся. Я свой, православный...

Ағаслыҡ араһынан йөнтәҫ баш һонолдо, шунан тотош кәүҙә күренде. Ҡаҡса һонтор әҙәм икән. Оло ғына йәштә булырға тейеш. Кейеме лә Леонтийҙыҡы һымаҡ алама. Бер-ике рәт суҡынды үҙе, ас ҡарашын төбәп, туҡтап ҡалды.

— Кем һин?

— Һинең кеүек алла бәндәһе. Андрей тип йөрөтәләр.

— Леонтий булам. Ҡайҙа юл тоттоң?

— Яҡшы кешеләр тарафына.

— Ундайҙар ни ҡайһы тарафта ла юҡ түгелдәр инде...

— Шулай ҙа бит... — Андрей, артабан ни әйтергә белмәгәндәй, урынында тапанды, берсә Леонтийҙың һул ҡулындағы икмәккә, берсә уның уң ҡулындағы бысаҡҡа ҡараш төшөрҙө. — Эйе, шулай,— тине ул ахырҙа. — Бына, һин дә һәйбәт кешегә оҡшағанһың, ҡоралыңды түгел, һүҙеңде алдын ебәрҙең...

Көлөмһөрәне Леонтий, «ай-һай, хәйләкәр!» тип уйланы эстән; һонторҙоң аҫтыртын ялағайланыуы менән килеште үҙе. Бысағын ҡынына тығып, һыныҡ икмәкте урталайға ғәҙел итеп бүлде. Ултырыштылар. Суҡынышып алдылар. Ләззәтте оҙаҡҡа һуҙмаҡҡа ашыҡмай сәйнәнеләр. Ҡуш units һыу эстеләр. Тағы суҡындылар.

— Спасибо, браток! Дай бог тебе здоровья! — Андрей, уң ҡулын йөрәк тәңгәленә ҡуйып, бик түбәнтен баш эйҙе.

Леонтий, үҙен хужа сифатындараҡ күреп, һорауҙы хәҙер инде ҡәтғи ҡуйҙы:

— Хуш, ҡайҙан ҡайҙа барыш?

Һүҙҙәр гәҙәти булһа ла, һорау етди икәнлеген бик асыҡ аңланы Андрей. Уратып-суратып торманы, ике тиҫтә йылға яҡын әүәле Бөгөлмә ҡасабаһы эргәһендәге Спасское тигән ауылда алпауытҡа эшләгәнен, шунан Твердышевҡа һатып ебәрелгәнен, әле килеп уның Ҡатау-Иванов заводынан ҡасып киткәнлеген һөйләне. Камаға, артабан Волгаға сыҡмаҡсы, имеш.

— Унда ни тапмаҡсыһың? Мин бына Соксон заводынан ҡастым. Ҡайҙа ла тормош беҙҙең кеүектәргә бер,— тине Леонтий, япраҡлы ботаҡ ишараһы менән эңелдеген сыҡҡан серәкәйҙәрҙе ҡыуа-ҡыуа.

— Ушкуйниктарға* иптәшлеккә,— тип ыржайҙы Андрей. — Кулага егеттәренә ҡушылып китмәк ниәттәмен. — Леонтийға һынаулы ҡараш һирпеп һораны: — Ишеткәнең бармы?

— Ишетмәйсә! Ниндәйҙер княгиняның имениеһынан ҡасҡан да үҙе кеүектәрҙе туплап алған...

— Бик хәтәр, әммә бик ғәҙел дә, тиҙәр. Уға барып юлыҡһаммы...

— Дарға юлың ҡыҫҡара, тимәк.

— Исмаһам, аҙыраҡ азат йәшәп ҡалыныр, тамаҡ туйыр...

Ризыҡ тураһында һүҙ сыҡҡас, йәнә үҙ-ара һынаулы ҡарашып алды ике ҡасҡын. Бая ашаған икмәк ашҡаҙанды ярһытты ғына. Сәйнәмлерәк, теш араһына ҡыҫылырҙай нәмә кәрәк тә бит...

— Йә, ни ҡылабыҙ артабан? — Леонтий урынынан торҙо. — Берәй йәнлек-маҙар аулап ҡарағанда, тим. Әллә балыҡ маташтырайыҡмы? Бәрҙе бар һымаҡ бында.

Кәкүк саҡырғанына баш ҡағаҡаға ултырған Андрей ҙа ҡалҡып торҙо, кескәй, әммә ағын ғына йылғаға ҡарап алды ла ырыя ғына ҡул һелтәне.

— Балыҡтың һурпаһы... Икәү бергә саҡта йүнлерәген хәстәрләһәксе. Һарыҡ-кәзә шунда...

— Һин нимә?! — Леонтий асыуланып китте. — Ҡасҡын тигәс тә, бында һиңә Кулага барҙыр!

— Кулага бит ябай халыҡты түгел, ана шуларҙың ҡанын эскән бай-бетсәне талай, ярлы-япанға ярҙам итә! Был тирәлә йәшәгән башҡорттарҙың да төрлөһө бар, берәй байының көтөүенән берәй һарыҡты йыҡҡанда уҡаһы ҡойолмаҫ. Андып торорбоҙ ҙа көтөүсеһе күҙ тайҙырғанын...

— Шым! — Леонтийҙың ҡырт киҫкәненән татлы хыялға бирелеүҙән хатта тамшана уҡ башлаған һонтор ҡапыл тертләп китте. — Бөгөлмә тирәһендә йәшәһәң дә башҡорт тормошон белеп бөтмәйһең. Уларҙың ярлы тигәнене дә мал-тыуары ишле генә була, байҙарыныҡы менән

*Ушкуйник — йылға буйҙарында юлбаҫарлыҡ итеүсе.

көтөүҙә бергә йөрөй. Бар, айырып ҡара — кемеһе кемдеке.

— Тамаҡ хаҡына аҙыраҡ гонаһҡа батаһың инде ул... — Андрей үҙ ниәтенән ҡайтырға ашыҡмай ине әле. — Бына һин дә урлашмай тормағанһыңдыр әле ошоғаса.

— Сәлдергән саҡтар ҙа булғыланы, ләкин...

— То-то! — Һонтор күңелле кеткелдәне.

— Юҡ! — Леонтийҙың һүҙ көрәштергеһе килмәй ине, өҙә һуғып әйтте: — Кеше таламайбыҙ! Бынау шырлыҡтарҙа оя баҫҡан ҡор йә һуйыр, селме шунда табылыр әле...

Урман эсен байҡай-ҡапшай киттеләр. Елле генә һуйыл йүнәтеп алдылар — ҡош-ҡорт һуҡмаға. Уларын — йөрөй-йөрөй — һис тап итә алманылар: әллә тегеләр бик оҫта йәшеренгән, әллә былар абайһыҙ. Бурһыҡ ҡыуғайнылар ҙа, униһы эҙен тиҙ яҙлыҡтырҙы. Ҡаҫҡындар янынан илек тәкәһе яңғыҙы сабып уҙҙы... Эшкинмәгән «һунарсылар», урман ҡыҙыра торғас, көтмәгәндә иркен туғайлыҡ ауыҙына килеп сыҡты. Ҡараштары шундуҡ алда, алыҫтараҡ, битләүҙә ҡорһағы күпсеп тигәндәй тәгәрәп ятҡан атҡа төштө.

## 4

Әминәнең кәйефе шәп бөгөн. Шәп булмай теге! Төндө Салауаты менән шундайын да һәйбәт үткәрҙеләр бит! Һөйөшөп туйманылар. Таты һаман да тәнде ләззәтләндерә. Күңелгә лә бик рәхәт. Анауы тауҙар түбәһенә йүгереп менге килә, анауы бөркөт шикелле бейек-бейектәрҙә ҡолас йәйеп осҡо килә...

Әминәнең кәйефе ифрат шәп. Шәп булмай әллә! Ана шул үткән төндә — хәйер, таң алдынан инде — буйындағы балаҡайына йән ҡунды бит! Эй-й, шундайын да рәхәтләндереп ҡапыл ҡыбырланы — эсендә ҡояш балҡып киттеме ни Әминәнең!

Иренең йөрәк яғы ҡулын алып ҡорһағына һалғайны, быныһы — атаҡ-атаҡ, ни арала йоҡоға киткән! — тойманы, ни бары «ыһ» тип кенә ҡуйҙы ла иркенерәк, тәрәнерәк һулыш ала башланы.

Иртә менән бейә һаумаға сыҡҡанында Салауаты етенсе төшөн күреп ҡалды. Ризыҡ яраштырырға ҡайтып килһә — абышҡа юҡ. Табын әҙерләп бөтөүгә генә күңелләнеп ҡайтып инде — баҡтиһәң, мурҙа ҡарарға барып килгән.

— Мына, — тине һаман да йөҙөнән йылмайыуы китмәгән Салауат, айғолаҡтарынан тал сыбығына кейҙереп ҡуйылған ҡойто ғына табышын өҫкә күтәрә биреберәк, — һыу ҡайтып бөткәс ней һәҙер төшмәй ҙә. Дүрт-биш бөртөктө булһа ла ҡурып ҡуйырһың әле.

— Балыҡ әҙ төшкәнгә лә ҡыуаныр кеше... — тип мәрәкәләргә башлағайны ла Әминә, ире ашъяулыҡ алдына йәһәт барып ултыра һалды ла сәй һораны. Әминә һүҙҙе йәнә шаяртыбыраҡ алып китте: — Үҙең һыу буйынан ҡайтҡанһың, үҙең һыу һорайһың ҡомой балыҡ һымаҡ...

— Көндәр матурайып китмәксе бит, Әминә. Шуға ҡыуанам. Хикмәт балыкта ла түгел, балыҡҡа барып ҡайтыуҙа хикмәт. — Салауаттың хәбәре тағы ҡайһылайыраҡ дауам итер ине икән, әммә ҡатыны һонған касаны ҡарһалан һөрпөлдәтергә кереште. Икенсе касаны ла һемереп ҡуйғас, алдындағы турам иткә йәбеште...

«Ашаңҡыраһың әле, шунан...» — тип уйлаған ҡатынға иренә оло яңылыкты еткерергә яҙмаған икән — анауы ҡарасман ҡәйнеше мәлһеҙ килеп...

Кәйефе кителмәне шулай ҙа Әминәнең. Ире вайымһыҙыраҡ сығып китһә лә, ҡатынының аратирә ташланған серле ҡарашына битараф ҡалһа ла... Хәйер, тирмә алдында үҙен оҙатҡанда Әминәгә нисектер ғәжәпләнә биреберәк тә, яғымлыраҡ та итеп бер күҙ һирпеп алды бит Салауат. Шатлығын-яңылығын ни еткерер әле — алда оҙон көн бар, йәнә ҡыҫҡа төн бар.

Үткән төндө күҙ алдына килтереп, Әминә янып-бешеп китте. Табын йыйыштырып йөрөгән еренән туҡтап, ике усы менән сикәләрен баҫты — бит ялҡыны тирмә тышына уҡ һирпелмәһен тигәндер инде... Ҡуй, былайтып әптәләнеү килешмәҫ, эш-көш итә һалһын да ике

туған ҡайнағаларының ҡатындары янына барып әйләнһен — шатлығы уртаҡлашыуҙы һорай ҙаһа! Ул Салауатты көтһәң. Кисһеҙ күрешмәҫтәр ҙә, бәлки.

Ире бүләк иткән бәләкәй көҙгөнө һандыҡтан ала һалып, диҡҡәт менән үҙ йөҙөнә баҡты Әминә. Беленер-беленмәҫ тут ҡалҡҡан икән битенә — кершән яҡһаң, сит-ят күҙгә күренеп бармаҫ. Күҙ төптәренә ҡуйыраҡ ебәрергә тура килер — күгәреңкерәгән, хәйерһеҙ. Их, ҡайҙа уның ҡыҙ саҡтары? Ун алты-ун һигеҙ йәштәге мәлдәре ҡайҙа? Ун һигеҙенсе йәшендә — һуңлатыбыраҡ — кейәүгә биргәйнеләр уны, ләкин ун алтылағы һымаҡ ҡына күренә ине. Хәҙер уға егерме бер йәш тулды. Ай-й, ҡартая лаһа! Ана бит, сырайына өлкәнлек төҫө апарыҡ ингән дәһә. Өлкәнәйә шул, ни тиһәң дә икенсе бала әсәһе булырға тора. Их, ҡайҙа уның ун алтылағы ҡыҙ сағы? Анауы Сәлимә, анауы Мәфрүзә, анауы Гөлбәзир кеүек саҡтары...

Ух! Ҡайнар һурпа түгелдеме ни өҫтөнә Әминәнең! Төштө ләһә иҫенә исеме Гөлбәзирҙең! Салауатҡа бала саҡтан йәрәшелгән ҡыҙ... Ай-й, кисәңге кеүек матур төндәр һирәгәйер инде артабан, һирәгәйер. Бынауы матур башланып торған йәй — күҙ асып күҙ йоммай ҙа ҡалырһың — төш кеүек үтер ҙә китер, тутлы һары һағыштарын һөйрәп килер ҙә етер көҙ. Көҙгөһөн Салауатына Гөлбәзирҙе туйлап бирәсәктәр...

Юҡ, апһын-әжеләре янына бармаясаҡ бөгөн Әминә. Шатлығы менән уртаҡлашмай торасаҡ. Мәле еткәс, үҙҙәре лә белер. Теге ваҡыт, әле йәйләүгә сыҡмаҫ борон, шул апһын-әжеләре зитына тейҙе бит, әйтәгүр! Салауат, уҡыуынан ҡайтып, ярты айлап та тормай шул Гөлбәзирҙе күрмәгә ысҡынғайны, килендәштәре үсәгәндәй тәтелдәптәтелдәне: «Көндәшленең көнө оҙон, көнөнән ғәйре төнө оҙон. Һиңә лә, Әминәкәй, килә ундай мәлдәр!» — береһе шулай уфтанғандай хәбәр сурытһа, икенсеһе йыуатып маташты: «Һин оло бисә булаһың, ҡыуан ғына, сөнки һинең хөкөм-һүҙ алдараҡ йөрөр, барыбер»... Юҡ-юҡ, үсәмәгән уны апһын-әжеләре, үҙҙәре көндәшле ғүмер иткәндән хәленә алдан инә була хәбәр һөйләгән бит улар. Ҡуй, барһын әле апһындарына! Барһын да түшелдерегенең аҫҡы ситенән түбән тирәһен һыйпаштыра-һыйпаштыра һөйләнеп эс бушатып ҡайтһын. Әминәне яратмай түгел бит Салауаты, ярата! Ағайымдан ҡалды тип торманы, Әминәне лә туйлап алды. Йәрәшелгән ҡыҙын да туйлап алырға хаҡы бар. Ике-өс бисә менән торорға Хоҙай үҙе ҡушҡан даһа.

Бынағайыш! Борсолған-ҡайғырғандай итһә, һылыулығы ҡайта төшә икән дә Әминәнең. Бына, тынысланғас, йөҙө яҙылды ла китте. Хатта матур икән дәһә ул, буйтым йәш әле. «Гел ошолай матур йөрөргә, үртәнмәҫкә кәрәк», — тип ҡарар ҡылды ҡатын, көҙгөһөн-бүтәнен ҡәҙерләп һандыҡҡа һалды, сығып, тирмә ишеген яҡшылап япты. Башта кемеһенә барырға самалап торҙо-торҙо ла ҡәйнәһенә һуғылып китергә ниәтләне. Атын етәккә алды, артабан килендәштәренә һыбай юлланыр, Рамаҙанын алдына ултыртып йөрөтөр. «На-на!» ярата бит бәпескенәһе. Өсөнсө йәше менән бара, атҡа менгәштереп алһаң, ҙурая ла китә. Атас!

Ҡәйнәһенә һуғылырға ла, апһын-әжендәренә барырға ла, Рамаҙанын һыбай йөрөтөргә лә яҙмаған икән Әминәгә. Дилбегә буйы ер китеп тә өлгөрмәне — баяғы ҡәйнеше ҡаршыһына килә ятасы. Ни уйларға ла белмәйенсә, ҡатын урынында туҡтап ҡалды. Уның туҡтағанын күреп, ҡарасман малай йүгерергә кереште, аһылдап килеп тә баҫты алдына.

— Еңгәй, атайымдар-ағайымдар Ҡобау юлланды. Өс-дүрт көнһөҙ ҡайтмабыҙ, тинеләр.

Йыш-йыш тын алһа ла малай хәбәрҙе асыҡ-теүәл еткерҙе. Шаңғып ҡалған Әминә берауыҡ өнһөҙ торҙо, үләнгә тартылған атының теҙгенен дә бушатманы. Ҡәйнеше иһә, «был ниндәй яуап бирер» тигәндәй, ҡабат һүҙ ҡатмайынса шулай уҡ тик баҫып торҙо. Ҡапыл бер ҡарарға килеп, Әминә эйәргә «ялп!» менеп ултырҙы, ҡәйнешенә «ә» лә «мә» лә тимәй, тоҡойоп сығып китте. Юлайҙың кесе улы тамам аптыраны.

Ире менән ҡайныһы киткән яҡҡа бер килке ат саптырып барҙы Әминә, башында һис ниндәй уй юҡ ине, ҡапыл иҫенә килде бына. Атын тәүҙә юрттырыуға, шунан атлауға күсерҙе.

«Мин дә алйот инде торғаны. Нимә тип арттарынан сабамдыр инде? Салауатҡа әйтеп ебәрер һүҙ-хәбәрем юҡсы... Бер күреп ҡалайым тигән булдым микән? Ҡыуып етһәм, мына аңшайырҙар ине. Ай-й, ҡайным алдында оятҡа ҡала яҙҙым даһа...»

Ҡатын кеше, менгеһенән әкрен генә төшөп, атын утларға ебәрҙе лә йәш үләнгә салҡан ятты, ҡараштарын асыҡ зәңгәр күккә төбәне. Хәтһеҙ генә ятты. Уйҙарының рәте-сираты ла булманы. Ахырҙа ниндәйҙер бер ҡарарға килде һымаҡ, ләкин ҡалҡына башлаған еренән әйләнеп йөҙтүбән кире ятты. Торҙо, ниһайәт. Һыбай бер сыҡҡас, ер-һыу күреп, елләнеп ҡайтырға хәл ҡылды. Юрттырып китте, битенә бәрелгән һалҡынсараҡ ағымға кинәнде, унда ла, һулда ла яңғыраған кәкүк моңдарынан һағышланды, тауҙарға һоҡланды, аҡландар гүзәллегенә хозурланды, сәскәләр матурлығына ҡыуанды. Йә был, йә теге тарафҡа йөрөй торғас, ҡояш төшлөккә етеп барған мәлдә тик бер йүнәлештә менгеһен сабыуға күсерҙе. Ҙур ғына туғайға кәйелеп килеп сығыуы булды, теҙгенен шаҡара тартып та ебәрҙе. Хорхолдап үрәпсене менгеһе.

Туғайҙа, унең тауҙар яғына күтәрелә башлаған тарафында, яңғыҙ ат аунап ята, ә янында кемдер тунҡанлай.

### 5

Юлайға юлдаштары менән Ҡобауҙа оҙаҡ туҡтап торорға тура килмәне. Ауылдың ышаныслылары сифатында тиҫтәләп ир-ат элеккегөн үк ер сауҙалашырға киткән икән, бөгөн-иртәгә ҡайтыуҙары ла ихтимал... Быны старшина алдында ҡаушабыраҡ ҡалған, елкәһен өҙлөкһөҙ тырнаған йәш ир — мәрхүм Бикмәттең улы Балағош һөйләне.

— Кемдәр анда баштап йөрөй? Һатырға үҙең бирҙеңме ризалыҡ? Ҡағыҙға кемдәр ҡул ҡуйҙы?

Юлайҙың аттан төшөп, ҡылысы ҡынын биленән алғараҡ шыуҙырып ҡуйыуы Балағошто өркөттө, шикелле, — артҡа сигенеңкерәне, әммә елкәһен һис тындырманы, берсә Юлайға, берсә уның юлдаштарына ҡараны, ахырҙа урам осо яғына күҙ һалды. Былай табан килгән ике һыбайлы күренде.

— Ҡашынма, бетлеғош! — тип екерҙе старшина. — Яуап бир!

Балағош ҡулын төшөрҙө, етеп килгән һыбайлыларҙы танырға тырышып, күҙен секерәйтте, тотлоғоңҡорап һүҙ башланы:

— Улы менән Әбүталип, Сәлим менән Көсөкәй, тағы Эрәсүл, ...ы-ы, Айсаның улы... киттеләр. Әбдерәшит йәнә...

Ҡапыл Салауат һорау бирҙе:

— Әбдрәшитме? Теге минең менән Сытырманда уҡығанмы?

— Ы-ы! — тип баш ҡаҡты Балағош, үҙе йәнә тырнанырға тотондо, үҙе ҡурҡыбыраҡ Юлайға төбәлде. Старшина, яҡынлашып килгән һыбайлыларға илтифат итмәйенсә, төпсөнөүен белде:

— Ҡәҙерғолдоң балдарысы?

— Ихсаны мында, Яхъяһы китте.

— Уйҙаным да инде шул Ҡәҙерғол эттең ҡотортоуылыр тип! — Юлай аттарынан төшөп үҙен сәләмләгән ике ирҙе ишетмәне, буғай, ҡамсыһы һабы менән итеге ҡуңысын төйгөсләне бер килке, шунан ғына яңы килгәндәргә тишә ҡарап бурҡылданы: — Һаубыҙ, һаубыҙ... Нимә, һеҙ ҙә ер һатып байырға йөрөйөгөҙмө?

— Әй-й, түрә, ер күп ул! Беҙгә етәр. Зауытҡа барыбер тартып алырҙар бушҡа. Шуға ризалаштыҡ та ҡуйҙыҡ. — Исламғол тигәне түбәтәйенең тыш яғы менән муйын тирәһен, битен һөрткөләне.

— Эйе шул, — тип йөпләне быныһын Мөстәҡим тигәне, кәзә һаҡалын семеткеләп.

— Ҡәҙерғол ҡайҙа әле? — Юлай атын менергә йәйләнде.

— Иртәнсәк умарталарын ҡарарға йыйына ине, кисләтеп кенә ҡайтыр микән... — Быныһын Исламғол әйтте.



*А.Вәсилов һүрәте.*

— Эйе, шулай. — Мөстәҡим йөпләп тә ҡуйҙы.

Юлай эйәр өҫтөндә ине инде. Ҡобау ирҙәрен тапата яҙып өйөрөлдө, ужарланып ҡамсыһын күтәрҙе, ажғырып янаны:

— Иген ашап ҡына көн күрерһегеҙ әле мына! Бер йылында уңыр ҙа икенсе-өсөнсөһөндә туңыр, һайрарһығыҙ шул саҡ!

— Һуң, таулы-урманлы ерҙәрҙе ҫатабыҙ ҙа, — тине тайшанып Исламғол, ҡара бейәһен дә ситкәрәк тарта-тарта.

— Тап шулай, тап шулай, — тип сәрелдәне Мөстәҡим, үҙе башын ике ҡулы менән ҡаплап сүгәләне — ҡамсылауҙан шөрләне, шикелле.

— Тоторһоғоҙ мынан ары умарта! Һунар итерһегеҙ — көт! Урыҫҡа кәрәк ер беҙгә кәрәкмәҫме?! Күп, имеш. Илар көнөгөҙ етер әле! Ух, эттәр!

Юлай йән асыуынан атына ҡамсы тартты, хужаһынан быны һис көтмәгән туры юрға ла уҫал айғылдап үрәпсене, теҙгенгә буйһоноп шулай ҙа старшинаны ауыл осона осороп алып китте. «Өфөгә, тимәк», — тип уйланы Салауат, Айытбайға ым бирҙе лә аңшайып торған ҡобауҙарға ҡарап баш сайҡаны, уфтанып өндәште:

— Әй ағайҙар, ағайҙар! Ҡулығыҙ менән тамғалап һатҡан ерҙәрегеҙҙе баштарығыҙ менән түләй-түләй кире яулар көн етһә, ништәрегеҙ? Ейәндәрегеҙ, бүләләрегеҙ, тыуаларығыҙ нисек йәшәр? Ошо ерҙәребеҙ өсөн ни хаҡ түләр?

— Аныһын кем уйлаған…

— Эйе шул…

Атаһы шикелле ҡыҙып-ярһып китмәйем тип, Салауат бер аҙға шым ҡалды, һаман тырнанған Балағошҡа йәлләп ҡараны, ахырҙа түҙмәй һораны:

— Ағай, ней зәхмәт ҡағылды елкәңә?

— Әй, әллә ниндәй ҡысынма шунда, бөтөрөп булмай ҙа ҡуя.

Балағоштоң яуабын көлкөгә алды Исламғол менән Мөстәҡим:

— Бисәһе ҡорсаңғы һыйырының муйынын ҡосаҡлаған беләге менән мының елкәһен дә ҡосаҡлаған…

— Шулай-шулай, зәхмәтле ҡулы менән ҡосаҡлаған…

Мәрәкә айышына төшөнмәне Салауат. Төшөнһә лә көлмәҫ ине. Тауышына ҡатылыҡ индереп, ауыҙ йырған әлеге икәүгә әйтте:

— Күпме ерҙе күпмегә һатҡанығыҙҙы беләһегеҙме, исмаһам?

— Хаҡын Өфөлә һөйләшәләр. Дәүиринннайҙарға шулай ҡушылған. Зауытсылар күпме ҡуялыр…

Исламғолдоң яуабын нисектер йөпләмәне был юлы Мөстәҡим, шымыбыраҡ, ләкин аңлайышлы сығарҙы һүҙҙәрен:

— Иген менән булашабыҙ бит. Ҡорамал-маҙарын да, бүтән тимерен дә бирә ти зауыттар.

Китешләй артына боролоп һөрәнләне Салауат:

— Иҫкәртегеҙ Әбдрәште: шәриктәшең ҡайтышлай һуғыла тип!

Атаһын Мәләгәҫ ауылына яртылыҡ юл ҡала ҡыуып етте ул. Өс һыбайлы Ҡариҙел үрендәге кисеүгә тиклем һөйләшмәй барҙы. Ҡояш төшлөктө уткәс кенә тамаҡ ялғап алдылар. Кисләтеп Өфөгә килгәс белделәр: ҡобауҙар эштәрен бөтөрөп ҡайтып киткән, имеш. Юлда нисек тап булышмағандарҙыр — алла ғына белә.

Иртәгәһенә провинция кәнсәһендә ажғырығын сәсеп маташҡан Юлайға писарь воеводаның да, бүтән түрәләрҙең дә бөгөн булмаясағын, ассесор Павел Богдановтың үҙенең йәйге имениеһында аҙна инде сыҡмай ятҡанын кинәйәле генә итеп аңлатты. Ут бөркөүе бушҡа ине старшинаның, шулай ҙа тиҙ генә һүнмәҫ ниәттән һөйләнде:

— Ул сусҡалар бер эсә баштаһа, туҡтатырһың — аҙналап еппәрә лә ҡуялар. Хайырһыҙҙар! Хәсистәр! Гөбөрнатырға барып етмәһәмме! Битербурға ялыу итмәһәмме!

Старшинаға писарь ҡағыҙ тоттторҙо.

— Ни нәмә был?

— Купчая, господин старшина. Все чин по чину.

Һүрелде Юлай. Ҡағыҙҙы улына һондо. Ҡысҡырып уҡырға ҡушты… Юлайға тәржемәсе кәрәкмәй ине.

«… Кубовской волости, команды старшины Юлая Адналина, деревни Кубов поверенныя… Абдрешит Тюкеев («Ҡара, һабаҡташ үҙ исемен беренсе ҡуйған бит әле!» — тип уй-

лап алды Салауат), Яхъя Кадыргулов, Абуталип Сейдяшев (Юлай ҡамсыһы һабын ике усына ҡыҫҡан көйө эскәмйәгә барып ултырҙы)… будучи в Уфе… дали сию купчую коллежским ассесорам медных и железных заводов содержателям Ивану Борисову сыну Твердышеву и Ивану ж Семенову сыну Месникову («Беҙҙең ҡанға күпме тоҙ һалыр артабан был мәскәйҙәр», — тип эстән уй йөрөттө Салауат, ә атаһы нилектәндер күҙҙәрен ыуғыланы). Мы и оной нашей деревни Кубовой мирские люди, а именно (артабан һәр ир-аттың исеме аталғанда Юлай бармаҡ бөкләй-бөкләй баш эйеп ултырҙы)… всего по именом и с ними («Хатараҡ киткән, шикелле», — Салауат, туҡталып, өҫтәл артындағы ҡағыҙ сыймаҡлап ултырған писарға ҡараш ташланы ла дауам итте) 34 человека, с общего добровольного согласия… объявлено в том, что продали мы им, Твердышеву и Месникову, детям и наследникам их в вечное владение (Салауат ҡарлыҡты) впрок бесповоротно (ҡарлығыуҙан тамаҡ ҡырып, берике йүткереп алды Салауат, писарь уға көрөшкә менән һыу һондо, ләкин егет ҡағылманы. Атаһы иһә башын тағы ла ныҡыраҡ эйҙе) к их Белорецкому и Катавскому железным заводам… вотчинную землю с лесы, сенными покосы, с рыбными ловли, с хмелевым щипанием, также с найденными железными и протчими впредь найденными ж рудами в тех проданных им межах».

— Ышырғандар бит инәһен! — Көтмәгәндә һүгенде Юлай, балаһына күтәрелеп ҡарарға ҡыймайынса, һикереп торҙо, ишекле-түрле кәләп һалды, ҡамсыһы менән итеген туҡманы.

Салауат уҡыуҙан туҡталып ҡалды. Уның да йөрәген гәр өтә. Һәр улыс, һәр ауыл үҙ ерҙәрен ошолай һата башлаһа, был башҡорт артабан ҡайҙа барып төртөлөр? Айҙа эҙләрме төйәк? Урыҫ бит үҙе хужа булып алған урындарға яҡын да юлатмай башҡортто! Алдап, талап, һуғышып, күпме биләмәләребеҙҙе баҫтылар! Йылҡы-һыйырыңа түгел, тауығыңа тибенер ер ҡалмай башланы. Ул ниндәй туймаҫ тамаҡ булып сыҡты әле урыҫ? Ул татары, бүтәне һеперелеп килеп тула башланы ата-бабаларыбыҙ еренә… Ана, әлеге шул Ҡобау ерҙәренән урын һорай сыуашы ла. Ярай, килделәр ти… Һуң, ниңә ошо ерҙәрҙең хужаларын ынйытырға, ошо ерҙәр хужалары иҫәбенә үҙ тамағыңды ҡайғыртырға? Башҡортто таламаһалар ҙа һәйбәт йәшәй алалар бит… Ни хәл итергә? Ниндәй сара күрергә?

Аяҡ быуындары дерелдәй башланы Салауаттың.

— Уҡы артабан! — тип бойорҙо Юлай.

Ямантау, Егәлгә, Бейектау тирәләренән, Ағиҙел, Инйәр, Йүрүҙән буйҙарынан, хатта Һарытоҙ яланы яҡтарынан арыу ғына өлөш сыға икән заводтарға. Ҡобау улысының аҫыл ерҙәре! «Уҡы! Уҡы!» — тип әленән-әле баш ҡаҡты Юлай, үҙе һәр йылға, һәр тау, һәр урман аталған һайын тертләп-тертләне.

«За показанную проданную землю со всеми угодьми денег, — Салауаттың тыны өҙөлдө, шайығын йота алмай аҙапланды, ахырҙа өҫтәлдәге көрөшкәнән уртларға уҡталды, ләкин ерәнде, — пятьсот шестьдесят руб.» — Салауат һандарға яңынан ҡаҙалды: эйе, 560 һум йәмгеһе.

Юлай телдән яҙғайны, башы шаулап, ҡолағы сыңланы. Салауаттың башын иһә ялҡын ялманы, маңлайына бөрсөк-бөрсөк тир ҡалҡты. Был ике башҡортҡа милләттәштәренең ер һатыуы көтөлмәгән яңылыҡ түгел, мәгәр ғәҙәттән тыш хәл, уны аҡыл ҡабул итмәй, шул бөтөрә йөрәкте. Әле килеп бына иҫ-зиһендә шаңғытҡаны, һине һеңгәҙәткәне — ергә — анауы ни һынлы ерҙәргә! — түләнгән хаҡ. Юлай ҙа, Салауат та Шайтан-Күҙәй улысының элекке старшинаһы Шағанай ҡоролоп ятҡан Эҫем заводына һатҡан ерҙәр өсөн Ырымбурҙарға барып судлашып йөрөгәндәрен, һис ни ҡыра алмағандарын, киреһенсә, үҙҙәре 600 һум штраф түләгәндәрен хәтерләп ғәрләнде. Ниндәй зәхмәт ҡағылған был башҡортҡа? Хоҙайҙың ҡаты ҡәһәре төшкәнме? Ниндәй гәйебе бар башҡорттоң Тәңре алдында? Систерәләр бит

һуңғы ыштанды ла! Систереү генәме — туңҡайталар!

Балаһының ҡағыҙҙы иҙәнгә ырғытып, һиңкетә баҫып урамға атылғанын атаһы томан аша ғына шәйләне. Ингәндәрендә ауыр шығырлап асылған ишек улы сығып киткәндә нисектер ҡыҙғаныс сыйылдап ҡалдысы. Юлай үҙе лә шыҡһыҙ бүлмәгә һыймай башланы, урынынан көскә күтәрелде. Аяҡ аҫтындағы ҡағыҙҙы мүкәйләп барып алған писарь (һаҡалы менән иҙән һеперҙе инде!) старшинаға күтәрелеп тә ҡараманы.

Аяҡтарын өҫтөрәп-һөйрәп килеп сыҡҡан атаһын йәлләп бер үртәлде Салауат. Анау тауыҡ мейеһе эҫкән ҡобауҙарға йәнә йәне көйҙө. Йәй башланып торған бынауындай ҙа матур көндә ниндәйҙер аңлайышһыҙ хәсрәт күңелен өйкәне.

Менгеләрҙең эйәрҙәрен йүнәтештереп, айылдарын тарттырып булашҡан Айытбай кәнсәләрҙә ни хәлдәр кисерелгәнен аңлағайны инде. Старшина асыуҙы үҙенә төшөрөп ҡуймаһын тип, былар яғына боролоп ҡараманы ғына түгел, аттар артынан башын да һерәндәтмәне. Юлай болдорҙан төшөп тә етмәне, менгеләр килтереп тә ҡуйылды, ә Айытбай үҙе күптән эйәрҙә ултыра ине.

— Атай, — тине Салауат, унан ҡараштарын йәшереп, — тағы Ырымбур юллап ҡарайыҡмы әллә? Старшина һынлы старшинаны һанламау — ниткән эш ул!

Юлайға кәр-ҡеүәт кире ҡайта башланы, буғай. Ажғырҙы:

— Юҡ! Йке аяғымдың береһен баҫмайым! — Атына «йәлп» менгәс, тауышын һүрелтеберәк өҫтәне: — Барыбер файҙа юҡ!

## 6

Ҡаҫҡындар кир айғырҙы әйләнгеләп йөрөнө лә, сүкәйеп, әңгәмә ҡорҙо:

— Һынған аяҡ менән ат ат түгел, — тине Андрей.

— Килеп алмаһалар, бүре-маҙар кинәнәсәк, — тине Леонтий.

— Эҙләгән ризыҡ алдыбыҙҙа ята.

Леонтий һонторға ғәжәпһенеп ҡараны:

— Һин махан ашайһыңмы ни?

— Башыңа төшһә, браток, эт итен дә ейерһең.

— Тимәк, салырға, берәр ботон йөкмәп китергәме?

— Ә һин? Махандан ерәнәһеңме ни?

— Ашайымсы, ләкин ат һынлы ат урларға йыйынмайым.

Икеһе лә аяғүрә баҫты. Күҙен йомоп, ауыр мышнап ятҡан айғырға бер эйелеп ҡарап, Андрей бот сапты:

— Еловая твоя голова! Мал түгел инде был ат! Үҙең әйттең дәһә: төнгөлөккә ҡалһа, януар-маҙар кинәнәсәк...

— Ошо тирәлә йәйләгән башҡорттарҙыҡы был. Улар үҙ малынан күҙ яҙлыктырмай. Ҡаҫҡын тигәс тә, ат ҡарағы түгелбеҙ.

— Берәй байҙыҡы был. Яңғыҙ аттан кәмемәҫ байлығы. Урламайбыҙ ҙаһа!

— Уныһы шулай... — Леонтий ҡапыл килеште Андрей менән, һаҡалын һыйпап ҡуйҙы ла тәҡдим индерҙе: — Беләһеңме, брат, үҙең әйтмешләй — нишләйбеҙ: ятһын кискә тиклем, беҙ ошо тирәнән китмәйерәк йөрөйөк. Тапһалар — үҙҙәренеке үҙҙәренә. Хоҙай ҡушһа, беҙ төнгә емтеклеккә ҡалдырмабыҙ.

Андрей ҡояшҡа саңҡайҙы, ҡорһағын ыуғыланы.

— Анауы ығышты бынауы түҙемһеҙ көтмәй бит әле...

Леонтий уның эсенә еңелсә төрттө:

— Терпи, казак, атаманом будешь!

Урманға инеп кенә баралар ине — ат тояғы тауыштары ишетелде. Боҫто былар.

Һыбайлы айғырҙы уға етәрәк кенә шәйләне, шикелле. Эйәренән төшмәйенсә, ятҡан малды әйләнеп сыҡты ла, ситкәрәк тартылып, ергә һикерҙе. Һомғол кәүҙәле матур ғына ир-егет икән. Һеләүһендәй оҙонйомшаҡ баҫып, ҡазаланған малҡайҙы йәнә бер ураны, шунан сүкәйҙе лә ентеклерәк тикшерҙе, һыҙғырып ебәрҙе.

Леонтий Андрейҙың иңбашына ҡағылды:

— Киттек!

— Да-а, браток, не повезло. Что ж, рыбачить попробуем.

— Алланан нығыраҡ һорамағанбыҙ, — тип шаяртты Леонтий.

— Аллаға ышанһаң... — Шулай тиһә лә Андрей суҡына һалып алды, күккә күҙ төшөрҙө.

Туғайлыҡҡа тағы бер һыбайлы килеп сыҡҡанын ҡасҡындар күрмәне, тауыштарын да ишетмәне.

Кир айғыр эргәһендәге ир-егет, өҫтөнә килеп сыҡҡан һыбайлыны танып, шат йылмайҙы, уға ҡаршы бара башланы, ләкин Әминә янтайҙы ла атын үрәпсетте. Гонаһ шомлоғо, көтмәгән, ике ятып бер төшөнә инмәгән кеше менән алағайымдан осрашсәле! Ҡайҙа-ҡайҙа — тирмәләрҙән алыҫ, аулаҡ яҡта...

Ҡайныһы Юлай ауылынан Аптыраҡ оҫтаның игеҙ һыңары Һөйәрембәт ине ул.

— Ниңә өркәһең, көйәҙ еңгәм? Өнөммө-төшөммө... Һаумыһың!

— Һау! Ништәп йөрөйһөң мында?

— Һине һағынып! Йәйҙәүгә сыҡҡандан күргән юҡ.

Ҡатын Һөйәрембәттең һүҙҙәренә «шылт» та итмәне, атын бейетә-бейетә һаман төпсөндө:

— Йәйҙәүегеҙ бы яҡта түгел, нимә аңдыйһың беҙҙең тирәлә?

Һөйәрембәт тә Әминәнең холҡон белә, үҙенекен ныҡыны:

— Һине аңдыйым, көйәҙ еңгәм! Мына ла, Тәңре ҡушҡас, осраттым!

— Нишана! Телеңә һалышһаң, Салауаттан тағы туҡматам! Белдең?

— Һинең хаҡҡа мең туҡмалырға ризамын. Барыбер һине һағынып килдем. Күргем килде. Бирәм тигән ҡолона...

— Етәр, телдәшмә! Һағынырға, ана, һыу һөлөгөндәй бисәң бар. Икенсе бисәлеккә ҡыҙҙар ҙа бөтмәгән... — Әминә утларға ҡырталашҡан менгеһен тыйҙы: — Тыр-р!

— Ҡыҙҙар ҡыҙыҡтырмай, үҙәгемде өҙгән — һин!

Ихлас, етди, ниндәйҙер моңһоу һағыш менән әйтте Һөйәрембәт. Ошо һүҙҙәрҙең-тойғоларҙың тәьҫиренәнме — әллә нишләне лә ҡуйҙы Әминә. Өндәшмәйенсә генә атынан төштө, кир айғыр янына барҙы. Малҡай, күҙен асып, мөлдөрәтеп бер ҡараны ла икенсе ҡабырғаһына әйләнеп ятты, бәбәктәре ситенән бәлләүер юлаҡтар һарҡылды. Ҡатын иһә донъяһын онотто, үҙенең дә бите буйлап йәштәре аҡҡанын һиҙмәне. Әй бахырҡай, кир айғыр. Дунәнлектән сыҡҡан ғына ғәләмәт шәп сағында ошолай әрәм булып ятсәле... Әминәнең дә Байдәүләте ошондайын ир ҡорона ингән генә мәлендә әрәм булды ла ҡуйҙы бит... Уйламаған-нитмәгәндә.

Әминә Юлайҙың өлкән улы Байдәүләткә кейәүгә сығып ярты йыл да үтмәне, ире ҡазаға осрап ҡуйҙы. Һунар өсөн ҡарсыға, шоңҡар, башҡа ҡыйғыр ҡоштар ауларға тип киткән бер төркөм егет-елән араһында Аптыраҡтың игеҙ улдары Яҡшымбәт менән Һөйәрембәт тә була. Заманында ошо Һөйәрембәт Әминәне һораткайны, ләкин уны Байдәүләткә бирҙеләр, сөнки ҡыҙ үҙе быға риза ине. Баяғы ҡош һунарында ҡатнашҡан Айытбайҙың, тағы бер нисә егеттең фаразлауынса, Байдәүләттең ҡаянан ҡолап имгәнеүенә Һөйәрембәт сәбәпсе, имеш. Һәр хәлдә, халыҡ араһында шыш-быш йөрөнө, ләкин ғәйепте ғәмәлдә Байдәүләттең үҙенән күрҙеләр. Ирен һунарҙаштары ярты үлек алып ҡайтҡандарын асыҡ хәтерләй Әминә. Ярты көн, оҙон төн буйы ятты, бахырҡай, ыңғырашманы, ләкин күҙен дә асманы. Ишеткәнаңлағанын йомоҡ керпектәрен дерелдәтеп йә уң ҡулының урта бармағын ҡыбырлатып ҡына белгертте. Көн тыуырҙа үтте аҡ донъянан. Йән бирерҙән алда шар асты күҙкәйҙәрен. Үҙен һаҡлап ултырған ике туған ағайҙарына, атаһына, күҙен асты тигәнгә йүгереп килеп еткән әсәһе менән Әминәгә сабыр ғына ҡараш ташланы ла таштай ҡатҡан йөҙлө ҡустыһы Салауатҡа ниңәлер бик оҙаҡ текәлде. Ике күҙ ҡойроғонан ике саф шишмә һарҡылып сыҡты. Керпектәрен бер йомдо ла Байдәүләт тағы асты һәм был юлайы фәҡәт Салауатҡа төбәлде... Быны васыятҡа юранылар, йыллығын үткәреп, ҡәйнеште еңгә ҡуйынына һалдылар. Шул йыл эсендә әлеге Һөйәрембәт — өйләнмәгән ине әле — Әминәне үҙенә алырға ике-өс тапҡыр ынтылып ҡараны. Ҡалым хаҡында тормағанын да асыҡ белдерҙе. Юлай ризалаша яҙғайны ла, Әминәнең ата-әсәһе лә

ыңғай һымаҡ ине, ләкин Салауат киреләнде. Етмәһә, Әминәнең дә ятмай ине күңеле Һөйәрембәткә. Салауаттан ныҡ туҡмалғас ҡына тынғайны Һөйәрембәт, йәһәт кенә өйләнеп тә ҡуйғайны...

— Әминә... — тип бышылданы кир айғырҙың яңағын һыйпап уйҙарға сумған ҡатын янына сүгәләп Һөйәрембәт.

— Ә-ә... Ништәп йөрөйөм тинең әле мында?

— Был — беҙҙең айғыр. Үҙенә өйөр тупламаҡҡа ҡасып киткән. Кисәнән бирле эҙҙәйбеҙ. Мына миңә тап итергә насип булған... Һине лә осраттым...

— Ә-ә-ә...

Һөйәрембәттең артабан ниҙәр һөйләгәнен ишетмәне ҡатын. Күҙе эсетә башлағас, яулыҡ осо менән һөртөп ҡараны — булманы. Яҡында ғына йылғасыҡ бар ине... Бәй, ана бит, сылтыр-сылтыр үҙенә саҡыра. Битте йыуып алырға кәрәк. Хәсрәттәрҙе йыуырға. Алып кит, йылғаҡай, хәсрәттәрҙе үҙең менән алыҫ-алыҫтарға...

Яулығын сисеп, беләктәрен һыҙғанып, йылғаға эйелеүе булды — Әминәне аймап та алды Һөйәрембәт. Һеләүһен хаслығы менән йәбеште!

— Кит, нишана! — Аңына килгән ҡатын уҫал ыҫылданы.

Өндәшмәне Һөйәрембәт. Ҡул ҡайырыша башланылар. Тыш та быш көрмәкләштеләр.

— Ебәр, оятһыҙ!

Ниһайәт, йыҡты егет ҡатынды.

— Яратам бит һине! Һине! — Һөйәрембәт, ыһылдай-ыһылдай, Әминәнең итәген күтәрә башланы.

— Ҡотҡарығыҙ! Үлтерәләр!

Сәңгел һөрән туғай елеп үтте, тауҙарға ҡаҡсылды, урман ярҙы, ҡоштарҙы һағайтты, кәкүктең өнөн тыҡты...

Леонтий урынында һикереп китте лә ҡапыл тертләгән Андрейға саф башҡортса өндәште:

— Ишеттеңме?

Алаҡандаған һонтор ҙа үҙе һиҙмәҫтән башҡортса өндәште:

— Үлтерәләр, ти. Ҡатын-ҡыҙ тауышы.

— Баяғы туғайҙа. Йүгерҙек!

Шыйыҡ ботаҡтар биттәрен ҡайыҙлағанды ла тоймайынса йүгерҙеләр. Күҙҙәренә иң тәү салынғаны — мәрмәр ике бот, шуларҙың араһына төшөп ятырға маташҡан баяғы һеләүһендәй егет. Һулаҡай ҡулы ҡатындың күлдәк итәген ҡайтарып аҙаплана, уңы менән унның ике беләгән ҡаушарынан шаҡара тотҡан; көсләнеүсе иһә йә бер, йә икенсе ҡабырғаһына янтая, башын борғолап, мыйыҡлы ауыҙҙан ҡасырға ынтыла.

Һай-һай, көс тигәнең бар икән һеләүһен егеттә! Андрейҙы әллә ҡайҙа бер генә бырағытты. «Ыңҡ!» итеп ҡалды браток. Үҙенең тос йоҙроғон сүкеш менән һандалға һуҡҡандай нисек кенә һәлмәк төшөрмәһен Леонтий, йөҙө лә сирылманы Һөйәрембәттең, шайтан! Эләгеп тәгәрәмәһә, күкрәгенә Леонтий менеп ятмаһа, ҡулдарын Андрей ҡайырмаһа, ҡатынҡай ҡамсыһы менән бәйләшмәһә — алыш ни менән барып осланырын әйтеүе ҡыйын. Ҡайһылай тулай, өҙә инде ҡайышты...

— Һөйәрембәт, аҡылыңа кил! — тип бойорҙо ҡатынҡай, ситкә боролоп өҫ-башын рәтләй-рәтләй.

«Исеме лә матур икән», — тип уйланы Леонтий, терһәген ыуа-ыуа.

— Ит тә ҡымыҙҙан гәйрәтләнгәнһең, әй! — тип һоҡланды Андрей.

— Ярар, сисегеҙ. Теймәмен берегеҙгә лә, — тип ғырылданы Һөйәрембәт, үҙе һаман Әминәнән күҙен алмай.

Ҡатын баш ҡаҡты, Леонтий һөйләнә-һөйләнә төйөн тағатты:

— Ҡыҙған саҡтар булғылай ул, егет. Ҡыҙғанда ла кеше иркенә ҡул һуҙма, йәме. Үҫмер түгелһең, аҡылың ҡайҙа?

— Күп лығырҙама, бирлый! — Һөйәрембәт ҡанаған иренен ялайялай екерҙе, юрғаһын етәкләп килтергән Әминәгә ғәжәпһенеп күҙ ташланы.

— Беглый, не беглый... — тип һүҙ башлағайны ла Андрей, харап аптырап, Леонтийға баҡты. Бынһы ла шаҡ ҡатты.

— Һөйәрембәт, — тине ҡаты ғына итеп Әминә, — мына менгең, ана бара юлың! Айғырыңды мына былар сала-тунай торор, мин арба ебәртермен — итен йәйләүеңә илтеп бирерҙәр...

— Ней бысағыма миңә кир айғыр ите! Ана, ҡотҡарыусыларыңа минән бүләк булыр. Күренеп тора — ас бит был биғлыйҙар.

— Да, мы беглые, но не от тебя убежали!

Леонтийҙың урыҫсалағанына Әминә ғәжәпләнде. Икеһенә лә алмаш-тилмәш ҡарап алды ла Һөйәрембәткә боролоп әйтте:

— Атың хаҡын түләрмен. Юлыңда бул!

— Һа! Нимә тип яуап тоторһоң Салауат алдында? — Һөйәрембәт мәкерле йылмайҙы, еңе менән иренен һөртөп алды. — Мынау ике ҡасҡынға юҡтан-бушҡа бүләк иттем тимәсһеңдер бит? Итен алып ҡайтһаң да яуап тоторға тура килә...

Һарыуы ҡайнаны Әминәнең. Өҙә һуғып әйтте:

— Тураһын һөйләрмен. Шаһиттарым бар. Һинең өсөн мына хәүефләнәм: бер бисәгә көсө етмәгән тип күҙеңде лә астырмаҫтар. Салауат ер йөҙөндә йөрөтмәҫ.

«Ай, Әминә! Әминәкәй! Ҡайһы яҡтан тондора белдең! Старшина килене шул...» — тип өҙөлөп уйланы Һөйәрембәт, ләкин ныҡышлығына барҙы:

— Биғлыйҙар шаһитлығына көнөң ҡалған икән...

— Үҙең ҡара, әйттем — бөттөм!

— Салауаттан да ҡурҡмайым! Байдәүләттән ҡалдың, унан да ҡалырһың. Барыбер миңә булырһың. Инәлтмәм. Көтә лә белəм. — Артығын ебәрҙе Һөйәрембәт. Ирҙәр хаҡында, их, килешмәгәнде ысҡындырҙы.

Үкенесе егеттең йөҙөнә сыҡҡанды күреп, Әминә бүтәнсә өндәшмәне. Һөйәрембәтте бар тип тә белмәгән ҡиәфәт менән менгеһе тарафына ҡуҙғалды. Аптыраҡ балаһы аптырап ҡарап торҙо әле бер килке. Леонтий менән Андрейға уҫал ғына итеп күҙ һирпте лә юрғаһына осоп ҡунды, тау аръяғына китеп тә юғалды. Ике ҡасҡын аңшайып баҫты ла ҡалды.

Кире килде Әминә.

— Эш һеҙгә терәлде, туғандар, — тине, менгеһенең тирлегенең аҫтына ҡулын тығып ҡарай-тикшерә: сырыш урындарын төҙәтеүелер.

Ҡатындың үҙ-үҙен тотошонан ҡасҡындар уның ябай ғына бисә түгеллеген аңғарғайны, аңшайып-аптырашып тороуҙары — бер-береһенең бөгөн иртәнсәктән сәйер хәлдәр кисереүе, йәнә лә икеһенең тиктомалдан тиерлек тап-таҙа башҡортса һөйләшеп китеүе. Хәйер, барсаһы хаҡында ла тыныс ҡына әңгәмәләшер форсат сығыр. Әле иң мөһиме — тамаҡ туйҙырыр яй табылыуы. Үҙҙәренә мөрәжәғәт иткән бынау сибәр ҡатынҡай, моғайын, ас ҡалдырмаҫ, көсләнеүҙән ҡотҡарған өсөн ҡоро рәхмәт белгертеү менән сикләнмәҫ. Ундайға оҡшамаған. Тыңлаһындар әле.

— Зауыттан ҡасҡанығыҙ, ысынлап та, йөҙ-ҡиәфәтегеҙҙән үк ҡысҡырып тора. Гел ҡаса-боҫа йөрөй алмаҫһығыҙ... Хәйер, — Әминә хәбәрҙе быларға иң кәрәкле яҡҡа бора һалды, — тәүҙә йәһәт кенә айғырҙы салығыҙ — ыҙаланмаһын; шунан мына беҙ торған ергә һөйрәтеп индерербеҙ, тунарһығыҙ. Эсәк арытырға ярҙамлашырмын. Йәгеҙ!

Ҡасҡындарҙың икеһе лә мал һуя белә икән, тик салғанда уңайһыҙлыҡ кисереп алдылар: суҡынмаҡсы иткәйнеләр — тыйылдылар. Әминә китер саҡта тағы күрһәтмәләр бирҙе:

— Ана-ау ҡаяның артындағы уянан ошо йылғасыҡҡа һалҡын шишмә ҡоя — итте шуның эсендә тотоғоҙ. Боҙолмаҫ, ҡош-ҡорт теймәҫ. Төйәк тә булыр ул урын. Иртәгә ирем менән килерем, ҡаҙан ишараты, тоҙ-маҙар хәстәрләрбеҙ. Йә, хушығыҙ!

Менгеһен юрттыра башлағас та артына боролоп ҡысҡырҙы:

— Ҡурҡмағыҙ! Һеҙ тимер эшен яҡшы беләһегеҙ — эйеме?

Ҡасҡындар тағы ауыҙ асып ҡалды, был сая ҡатын тауҙар араһына сабып инеп киткәнсе ҡымшанманылар ҙа.

**7**

— Амалия, ҡарале! Ана, күрәһеңме?

Асыҡ көймәлә ҡайҡайып ултырған утыҙ самаһындағы ир үҙе эргәһендә йоҡомһораужан башы кәлпелдеген сыҡҡан ҡатынының яуры-

нына һаҡ ҡына ҡағылды ла, бының ҡараштарына мәғәнәлелек ғәләмәттәре ингәнен абайлағас, ҡулын ике ҙур тау һырттары яғына һелтәне.

— Мин был шыҡһыҙ пейзаждан туйҙым инде, Петр Симон!

— Юҡ-юҡ, Амалия Карловна, мин һиңә пейзаж күрһәтмәйем. Һин ана шул пейзаждың бер деталенә — Урал амазонкаһына ҡара. Нисегерәк елдерә, ә!

— Фи, Петр Симон... Һинең уйыңда гел амазонкалар булыр.

— Күгәрсенкәйем, мин бит тәбиғәт фәндәре белгесе, ә был амазонка — ана шул тәбиғәттең бер өлөшө.

— Башҡорт ҡатыны түгел, башҡорт ире шулай һыбай сапҡанын күргәндә бер ҙә һоҡланмағайның әле...

— Һин мине шул ҡырағайҙан да көнләшәһеңме инде, Амалия?

— Көнләшә-көнләшмәй, ялҡытты мине ошолай йөрөүҙәр. Ҡайҙа ла, үҙең әйтмешләй, ҡырағайлыҡ! Фи!

— Һеҙ, Амалия Карловна, бышҡырмай тороғоҙ әле! Минең жалованье туйҙырҙымы ни? Ана, капитан Рычковҡа йөҙ түләһәләр, миңә һигеҙ йөҙҙө!

— Туҡтале, Петр Симон!

— Юҡ, тыңлап бөтөгөҙ: ошондай шәп тәбиғәт ҡосағында ял итеп кенә йөрөүе ялҡыттымы? Кухарка бешергәнде генә ашап. Кер ҙә йыумайһың, ҡыл да ҡыбырлатмайһың...

— Мин һеҙгә, Петр Симон әфәнде — юҡ, һерр тимәйем, һеҙ косподин хәҙер — кер йыуырға, ашарға бешерергә сыҡмаған!

— Ярар, етер! Бынығын былай ғына әйттем.

— Етмәй торһон әле! Өс йыл һеперелеп йөрөйбөҙ ҡырағай Рәсәйҙә, тағы күпме йөрөтөрһөң?

— Үлгәнсе!

— Цивилизация күрмәйенсә бөтән, тимәк?

— Цивилизация күргең килгәс, ҡайтарып ебәрәм!

— Минән ҡотолоп, ҡырағай амазонкалар менән типтереп йәшәмәксеһеңме? Ихтыяр ҡуймам!

— Улай икән, яп ауыҙыңды, зинһар...

Ир менән ҡатын, баштарын бер-береһенән ситкә сөйөрөп, шымды, ниһайәт. Петр Симон артына күҙ һала ҡуйҙы — иҫенә төштө: көймәнән ҡала килгән гимназистар Зуев менән Соколов быларҙың әрләшкәнен ишеттеме икән, йәнәһе. Хәйер, тыңлаһалар ҙа аңламағандарҙыр, урыҫ һарыҡтары! Байтаҡ телдәрҙә иркен һөйләшкән академик Паллас ирендәрен мыҫҡыллы салшайтты, ләкин үҙ уй-фекеренең ғәҙел түгеллеген дә аңғарҙы.

«Эйе, — тип һығымта яһарға кереште ул, — ике гимназист та егәрле, күпте белергә, аңларға тырыша, анализ яһарға ла өйрәнеп киләләр. Шулай ҙа был урыҫ бәрәндәренән мал сығыуы әлегә икеле...»

Паллас экспедицияһы ағзалары — һалдат улы Василий Зуевтың, пономарь улы Никита Соколовтың — береһенә 16, икенсеһенә 22 йәш — киләсәктә үҙе кеүек академик булып китәсәктәрен белһә, Петр Симон нимә уйлар ине икән?

Әле ул бая күреп ҡалған амазонканы уйлап килә. Ҡара һин уны — нисек матур бара атта! Ултырыуының килешлеге! Эйәгән алға сөйөп, ҡараштарын әллә ҡайҙарға төбәп сапҡан шул ҡыҙыҡайҙы яҡындан күрһәң ине. Моғайын, бик матурҙыр. Их, берәй ошондай дикарка менән төн үткәргәндә... Әйткәндәй, ҡыҙыҡ булһын әле: Амалияны һыбай йөрөтөп ҡарарға кәрәк, амазонкаға оҡшар микән?

«Фу, Амалия, — тип уйы менән ҡатынына бороло Паллас, — башҡорт ирҙәренең һыбай йөрөгәненә һоҡланманым, имеш. Нисек тә һоҡландым әле! Һин генә күңелеңә алмағанһың. Кентаврҙар бит улар торғаны! Геродот ҡартлас, моғайын да, ошо башҡорттарҙы күҙ уңында тотҡан... Ат өҫтөндәге башҡорт беҙҙең бюргерҙар түгел инде. Ҡайһы бер нәмәләрҙә ғәҙел дә була белергә кәрәк ғалим кешегә. Ана, кисә алты ғына йортло бер ауылды үткәйнеләр. Нисек атала? — Паллас, хәтерен соҡоғандай, маңлай тырнаны. — Кулмәк? Ҡалмаҡ? Фу, әллә ниндәй ҡырағай исемдәр... Мәгәр был ауыл башҡорттары ғәжәп тирмән

ҡорған. Ғәжәп! Йылғаны ике рәт тал ҡойма, — Паллас тағы ла «хәтерен соҡорға» кереште, — э-э, ситян, буғай, менән быуғандар ҙа урталыҡҡа тупраҡ тултырғандар. Ҡаҙыҡтарға кескәй өй ултыртылған, уның уртаһында — бура. Уға ағастан бысылған дүңгәләк ҡуйылған. Дүңгәләктәрҙең бер-береһенә тейеп торған өлөшөнә тимер тештәр ҡатылған. Бындай тирмәндең бәләкәйләтелгән өлгөһөн дә күргәне бар: ҡул тирмәне... Ҡыҙыҡ та инде! Хәйер, примитив...»

Иренең уйҙарын бүлеп, Амалия бурылданы:

— Барып туҡтайбыҙмы берәй урынға, ниһайәт?

Ҡатынының әйткәне — үҙ-ара килешеүгә уның тарафынан тәүге аҙым. Икенсеһен Петр Симон яһарға тейеш.

— Хәҙер-хәҙер, күгәрсенкәйем! Хәйер, ана, ауыл күренде лә инде...

Һарыҡондоҙ тауҙарының ике һырты араһында урынлашҡан был ауылда, Палласҡа алдан әйтеүҙәренсә, шайтан-күҙәйҙәрҙең башлығы Гулей йәшәй. Унда юғалған йылға бар, тинеләр. Бик ҡыҙыҡ! Ҡабат бер ҡайҙан да кире ер өҫтөнә килеп сыҡмай, тинеләр. Бик-бик ҡыҙыҡ!

Юлай ауылының осонда Палласты, уның юлдаштарын менгеләрен етәктә тотҡан егермеләп ир-ат, бер нисә ҡыҙ-ҡырҡын, атһыҙ ҡарт-ҡоро ҡаршыланы. Ситке йорт ихатаһын уратҡан ситән артынан да баштар күренә. Атлы ике арбалағы мискәләр янында ике бабай дөйөм төркөмдән ситтәрәк-арттараҡ ҡатып ҡалған.

Бай кейемле, баһадир кәүҙәле, ихтыяр көсө йөҙөнә генә түгел, тотош килбәт-ҡиәфәтенә сыҡҡан ҡырҡтар тирәһендәге иргә тәүҙә үк иғтибар итте сәйәхәтсе. Донъя күргән кеше бит ул — кемдең кем икәнен төшөнмәҫкә теге! Көймәнән һикереүе булды — күҙ асып күҙ йомғансы янында ла булды.

— Ви ист старшина Гулей?

— Гутен таг, һерр! — тип итәғәтле йылмайҙы быныһы, ҡуш ҡуллап күреште лә хатаны төҙәтә һалды: — Ихь бин кайн старшина Юлай, ихь — старшина Базаргол Юнаев.

— О, зинд зи дэр нойе старшина! Ихь бин фро. Унт шпрэхен зи дойч! Гут[1].

Сәйәхәтсенең нимә әйткәнен төшөнһә лә Баҙарғол ҡапылда яуап ҡайтара алмай торҙо. Шул арала Паллас мөһабәт кәүҙәле старшинаның камзул түшендәге алтын сылбырға тағылған оҙонса түңәрәк алтын миҙалға иғтибар итә һалды. Миҙал йөҙөндәге саҡ ҡына ҡабарынҡыраҡ хәрефтәрҙе ихтирам менән һыйпаны.

— О, Катарин...

Шунан миҙалдың арт яғын әйләндерҙе, ундағы таж рәсеменә шулай уҡ һоҡланып ҡараны, яҙыуҙы нисектер боҙмайынса дөрөҫ уҡыны урыҫса: «Бляжин-иство каждаго и... э-э... всех». Үҙ-үҙенән ҡәнәғәт ҡалды ла Баҙарғолға ихтирам менән ҡараны.

— О, зинд зи аусэрдэм депутиерте![2]

Старшина Юнаев алманса һөйләшеүҙе туҡтатырға ниәтләне:

— Ихь кэннэ ирэ шпрахэ нихть...[3]

Ғалим аптырап ҡалды: нисек инде немецса белмәй? Шаярталыр был кеше тип, үҙенсә бер нисә ауыҙ һүҙ әйтте. Баҙарғол төшөнөп етмәне, шулай ҙа «закон», «комиссия» тигәндән ҡайһы юҫыҡта хәбәр барғанын аңғарҙы. Ахырҙа Паллас ябайыраҡ һорау бирҙе:

— Хабэн зи мит дэр Кайзэрин приват гэшпрохен?[4]

— Я, зи хат мих зельбст ауфгэноммэн.[5]

[1] — Хәйерле көн, әфәнде! Мин старшина Юлай түгел, мин старшина Баҙарғол Юнаев.

— О, һеҙ яңы старшинамы? Шатмын. Немецса һөйләшәһегеҙ икән. Һәйбәт.

[2] — О, һеҙ депутат та икән әле!

[3] — Һеҙҙең телегеҙҙе белмәйем...

[4] — Һеҙҙе батшабикә шәхсән ҡабул иттеме?

[5] — Эйе, шәхсән ҡабул итте.

— Вэльхэ Айндрук хат зи ауф инэн гэмахт?[1]

— Дас ист айне клюге фрау![2]

Баҙарғолдоң яуабы ҡәнәғәтләндерҙе Палласты, көлөп ебәрҙе, старшина иһә урыҫсаға күсте. Уның хәлен аңлап, әңгәмәгә баянан бирле ҡыҫылыуҙы кәрәк тапмай торған гимназистарҙың береһе — Антон Вальтер — тәржемәләргә кереште:

— Баҙарғол әфәнде Мәкәтин улыҫы хужаһы, ә бындағы башлыҡ — старшина Юлай Ҡобауға киткән, урынына сотнигы ҡалған... — Бая ҡаршылаусылар алдындараҡ торған, әле Баҙарғолға яҡыныраҡ йылышҡан урта буйлы ҡаҡса ир, үҙенә ишараны аңғарып, һынын турайтты.

— Исфините, каспадин сотник, — тип баш ҡаҡты Паллас.

Сотник ирәйеп китте, күкрәген киргән булды, алға бер аҙым яһамаҡ ине лә, ғалимды инде артабан үҙе ҡыҙыҡһындырмағанын күреп, тыйылды. Тәржемәсе дауам итте:

— Депутат әфәнде Өфөгә китеп барышлай һеҙҙе күргеһе килеп бында туҡтаған... Немецса икмәк-тоҙлоҡ ҡына белә...

— О, отшен карашо, — тине лә ғалим, үҙ теленә күсеп, Юлай ауылы, уның тәбиғәт ҡомарткылары хаҡында белешергә керешеп китте. Табын янында әңгәмәләшербеҙ тип, сәйәхәтсене һәм уның юлдаштарын ҡымыҙ эсергә саҡырҙылар.

— Амалия Карловна, — тип өндәште Паллас ситтәрәк торған һәм башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарын диҡҡәт менән күҙәткән ҡатынына, — башҡорттар беҙҙе ғәҙәтенсә бейә һөтө менән һыйламаҡсы. Әйҙә, ауыҙ иткән бул, исмаһам. Күңелдәрен күрәйек.

— Фи! Ҡырағайҙарҙың ҡырағай эсемлегенән ҡоҫҡо килә...

Ҡайһы арала мискәләр арбаларҙан төшөрөлөп һабаларға бушатылғандыр, ни арала сеүәтәләр ашъяулыҡҡа теҙеп ултыртылғандыр — теге ике бабай ағас ижау менән ҡымыҙ һапыра ине инде, яндарында бер егет һалҡын ит турай... Ултырыштылар. Иң ҡыҙығы — ҡатын-ҡыҙ, бала-саға табынға ыҡламаны. Хәйер, уларҙы саҡырманылар ҙа. Амалия ла шулар янында ҡалды, һәр береһенең түшелдереген, ҡашмауын тотҡолап ҡараны, камзул йә сәсмәүҙәренә баҫылған тәңкәләрҙе ентекләп күҙҙән үткәрҙе. Береһендә алман аҡсаһын күреп, Вальтерҙы саҡырҙы:

— Һора: ҡайҙан был?

— Ирем һеҙҙең батшағыҙға ҡаршы һуғышта йөрөнө, — тип тәржемә итте Антон, шунан Палластың бисәһенә Рәсәй менән Пруссия араһындағы ете йыллыҡ һуғышта башҡорттарҙың да ҡатнашҡаны хаҡында үҙенән мәғлүмәттәр өҫтәне.

Амалия бала-саға төркөмөнә күҙ һалды. Бәләкәй генә бер ҡыҙыҡайҙың балитәкле күлдәгенә нишләптер нығ иғтибар бирҙе. Итәкте күтәрә башлағайны ғына, ҡыҙыҡай, бурҙаттай ҡыҙарып, уның ҡулына һуҡты, устары менән битен ҡаплап, ситән аръяғына йүгереп китте.

— Вильде![3] — тине, иренен салшайтып, Амалия.

— Сусҡа мәрйәһе! — тине ғәрлеге ташҡан ҡыҙыҡай.

Паллас ҡымыҙ тәменә өйрәнгәйне инде. Уның да тәү мәлдәрҙә ҡоҫҡоһо килеп ыҙалатҡайны, әммә тиҙ күнекте. Сәйәхәтсене иң ғәжәпләндергәне ирлек ҡеүәтенең бермәбер артыуы булды. Амалияһын төндәрен эҙ аптыратманы... Әле лә сотник һуҙған беренсе сеүәтәне башҡорт ғәҙәтенсә ҡуш ҡуллап ҡабул ҡылды ла «йәлп» түңкәреп ҡуйҙы. Тәне буйлап рәхәт тулҡын йүгергәненә кинәнде. Икенсе сеүәтәне лә ихлас йомдорҙо. Күҙҙәрен ҡыҫып, телен-иренен сәпелдәтте, бармаҡ шартлатып: «Һерлих!» — тине, шунан иткә үрелде.

— Шәп тип маҡтай, — тине Баҙарғол.

— Ҡымыз наш бульнә шәп! — тип эләп алды сотник. — Самай харуш сағы!

— И-их! — тип көрһөндө Баҙарғол. — Айытбайҙы алып киткән Юлай... Мынауыңа ла тыңлатырға ине.

---

[1] — Ниндәй тойғо ҡалдырҙы ул һеҙҙә?
[2] — Аҡыллы ҡатын!
[3] — Ҡырағай!

— Атаҡ-атаҡ! Айытбай булмаһа ней, унан кәм йырҙамагандар ҙа бар мында! — Сотник әлеге һүҙҙәрен ҡаҡайыбыраҡ әйтте.

Әңгәмә айышын тәржемә аша төшөнөп ултырған Петр Симон башҡорттарҙы дәртләндереп ебәреүҙе кәрәк тапты:

— Ви поет, ихь — слюшайт!

Сотниктың нисек тә үҙ һөнәренһәләтен күрһәтеп ҡалдырғыһы килгән икән дә — ҡаршыһындағы иргә һиҙҙермәй генә ишара яһаны, быныһы әллә ҡайһы арала ҡурайын килтереп сығарҙы ла көй һуҙҙы — йыр ағылды. Тауышы моңло, яғымлы булып сыҡты лаһа сотниктың! Хәтәр мәғәнә лә һалған бит әле һүҙҙәренә:

Беләләр ҙә микән сит илдәрҙә
Уралтауҙың йәйелеп ятҡанын,
Ниндәй генә яуға барһалар ҙа
Башҡорттарҙың еңеп
ҡайтҡанын...

Табынға бер ултырһа, унан ҡапылда тороп китә һалмаҫ тип, ҡатын-ҡыҙ менән бала-саға яйлап таралышты. Теҙгенен менгеһенең башы аша ташлап торған һомғол кәүҙәле һылыуҡай янына йәһәт барып етте Амалия — быныһы туҡтап ҡалды. Мәжлестә ултырғандар араһынан Вальтер ырғып торҙо ла, сәйнәнә-сәйнәнә, йүгереп килде. Ул арала Амалия тикшереп-тикшерҙе ҡатынҡайҙы: сәс — шәп, бөгәренә төшөп тора, ҡоҙғон ҡанатылай ҡап-ҡара; матур күҙҙәренең төбөндә-төбөндә — ихтыяр көсө; һығылмалы кәүҙәһенән нәзәкәтлек бөркөлә... Ғөмүмән, үҙ-үҙен тотошонда ниндәйҙер дәрәжә бар, ғорурлыҡ бар. «Был ҡырағайҙар ҙа матур шул», — тип эстән генә уйланы Палластың бисәһе. Сибәр ҡатын-ҡыҙҙы əҙ күрмәне ул башҡорттар араһында, ләкин күргән һайын ҡыҙығып күҙәтә.

— Һора: кем был амазонка? — тине ул Вальтерға.

Вата-емерә башҡортсалап, араһында урыҫсалап аҙапланған Вальтерҙы аңланы һылыуҡай, яуап ҡайтарыр урынға үҙе һораны:

— Кем амазонка? Ул амазонка?

Вальтер буталана башланы, берсә Амалияға, берсә башҡорт бисәкәйенә ҡараны, уның аты нимәгәләр хушһынып бышҡырҙы.

Амалия ҡырт бороldo ла, йышйыш баҫып, аш бешереүсеһе үҙенә айырым ҡорған табын тарафына китте. «Тәржемәсене лә аңламағас, ҡырағайҙар инде былар барыбер. Матур булмағайҙары!» — тип һөйләнде ауыҙ эсенән.

Тәржемәсе ныҡ уңайһыҙланып ҡыҙарынды, урыҫса-башҡортса ғәфү үтенеп маташты эйәренә ни араларыр менеп тә ултырған һылыуҡайҙан. Вальтер тағы ла нимәләр әйтергә ауыҙ асҡансы, быныһы юрттырып сыҡты ла китте. «Амазонка» тигәнде ике телдә нисек аңлатырға белмәгән егет уның артынан һоҡланыулы ҡараштарын алманы, ҡолағына иһә табындағы һөйләшеүҙәрҙән өҙөктәр яғыла:

— Это ист махан?

— Найн. Шаф.

— О, гут! Добро офца. Я ист любить офца.

## 8

Юлай ауылының ситендәге шау сәскәле хәтфәлә ҡапылғара әтмәләнгән табында сотник йыр һуҙғанда бында исеме телгә алынған Айытбай әлеге урындан алыҫ ҡына ерҙә, Ҡобау ауылы эргәһендә, ойошторолған ологара табында тамаҡ йомшартты. Тәүҙә ике-өс уртлам ҡымыҙ йотто, шунан тәрәнтен тын алды ла уны «о-о-оһ!» тип кире сығарҙы, тағы бер йотом эсемлекте ауыҙында аҙыраҡ тотоп торҙо; күкрәген кирә, башын ҡайҡайта бирә йәнә эсенә тын тартты... Ниһайәт, башланы. Ҡурайһыҙ йырланы:

Урал да ғынай тип ҡараһам —
Балҡып ҡына ятҡан ерҙәрҙер,
әй-й!
Уралҡайын һаҡтап яуҙар
сапҡан —
Бөркөт кеүек аҫыл ирҙәрҙер...

Аһәңле көслө тауыш өс түңәрәк ултырған ҡорҙағы халыҡ өҫтөнә тулҡын-тулҡын ябырылды, тулҡын-

тулҡын ҡаҡты әҙәмдәрҙең күңелдәрен. Уралдың үҙе кеүек мөһабәт, Күктең үҙе шикелле киң үә бейек, Агиҙел һымаҡ тәрән үә гәйрәтле ағымлы, кискә ауышҡан әлеге көндөң дымҡыл һауаһын тирбәлтер-тирбәлтмәҫ иҫкән елдәй йомшаҡ та яғымлы ине Айытбай уҙамандың моң-тауышы. Ҡайһы ғына еренән сығалыр ул ҡаҡса-тәпәшәк егет кенәнең?!

...Ҡобауҙа иллә ныҡ әҙерләнеп көткәндәр, имеш, үҙҙәренең түрәһен. Юлай менән ике юлдашының Лабау кисеүенә яҡынлашыуы булды — йүгәндәре-айылдары-тартмалары баҫма көмөш биҙәкле, япмалары нағышлы аттарҙа (барыһы ла ҡола төҫтә бит әле) яһаныулы егетелән ҡыйҡыулап ҡаршыланы ҡунаҡтарҙы. Кемеһелер мылтыҡ гөпөлдәтте хатта. Сәләм-котлауҙарҙы эреләнмәй ҡабул итте Юлай. Йәшелкенсәк ҡаршылауынан һуң алда уны ир-азаматтар, ололар-ҡарттар тәбриге көтә — ана шунда дәрәжә тота белергә кәрәклеген дә старшина күптән ҡанына һеңдергән. Үҙҙәре кеүек үк йәш Салауатҡа ҡаршылаусылар иғтибар-әһәмиәт бирмәне. «Дөрөҫ, — тип уйланы Юлай, түрәләрҙең эйәртеүле һәр балаһын ололоҡлай китһәң...»

Һыбайлылар, ҙур ҡунаҡты уралтып, аттарын аҡрын юрттырып, старшинаны ауыл ситендә йыйылған халыҡ алдына килтерҙе. Ҡобауҙарҙың инәләрен танытырға оҙон юл буйына ҡәһәтләнеп килгән Юлай былар ҡаршыһына йөҙөнә һис ни сығармай барып баҫты. Киреһенсә, киң йылмайып, үҙен төрлөсә сәләмләгән ҡәүемде хөрмәтләп, уң ҡулын йөрәгә тәңгәленә ҡуйып баш эйҙе. Шунан тейешле олпатлыҡ һаҡлап атынан төштө, ҡамсыһын эйәр ҡашағаһына элгәс, һонолған тәгәстән «бисмиллалап» ҡымыҙ тәмләне. Нәҙек, сағыу тауышлы мулла доға уҡыны. Бит һыйпанылар. Ахырҙа шаулаша-шаулаша, хәл-әхүәл һораша-һораша, арҡаларҙан ҡағыша-ҡағыша, табын ҡоролған ерғә ынғайланылар. Етеү-



А.Вәсилов һүрәте.

ҙәренә ярым түңәрәккә теҙелгән ир-ат дәһшәтле ғыжлатып ҡурай тартып ебәрҙе.

Көңгөр-ҡаңғыр араһында Әбдрәшит Салауатты ҡырғараҡ айырып алды. Ҡосаҡлашып көрәште шәриктәштәр. Икеһе лә ер һатыу менән бәйле оло хәбәр-әңгәмә-әрҙең иртәгә ҡубасағын белә, шуға ла берберсеһенән ул-был ғына һораштылар.

— Һиңә аш-һыуҙы өйөмдә айырым яраштырттым, — тип белдерҙе Әбдрәшит. — Әпкитһәм, атайыңдан рөхсәттер?

Салауаттың төп ҡорҙа ҡатнашҡыһы килә, ләкин һабаҡташына һуғылырға үҙе иҫкәртеп киткәйне бит.

— Борсолма,— тине Әбдрәшит, — былар ҡыҙып алыуға кире килербеҙ ҙә, халыҡ таралышҡас, тағы миңә ҡайтып йоҡларбыҙ.

— Яҡшы. Байтаҡтан күрешкән юҡ, ауҙаҡтап һөйҙәшербеҙ, — тип ризалашты Салауат, шулай ҙа йөҙҙәр араһынан атаһының ҡарашын эләктереп, ым ташланы. Старшина һиҙелер-һиҙелмәҫ кенә баш ҡаҡты: рөхсәт. Иллә мәгәр Салауат китергә ҡабаланманы, һаман тапанды, күҙҙәрен бер тирәгә шыпырт ҡына һирпеп-һирпеп ала. Шәйләне быны шәриктәше.

— Эй, суҡынсыҡ! Өлгөргән!

— Нимәгә өлгөргән? — Аңламағанға һалышты Салауат.

— Сибәркәйҙе күрә һалып...

— Һуҡыр ҙа күрер... Кем ул?

Быларҙың айырым гәпләшеп торғанына иғтибар итә башлағайнылар, шуға Әбдрәшит өҙә һуҡты:

— Ҡунаҡ ҡыҙы. Аҙаҡ... Йә, әйҙә!

Салауат теге тарафҡа йәнә йәшертен күҙ атты ла һабаҡташы ихтыярына буйһонҙо.

Ҡыҙыҡай ҡайҙа ла һәммә егетеләндең үҙенә айырата ҡарағанына күптән күнеккәнгә оҡшай, гел иғтибар үҙәгендә булыуына әһәмиәт биреп тә бармай, буғай. Илтифатһыҙ, вайымһыҙ ҙа түгел. Ана, эргәһендә ураланған саяраҡтар менән шаярып та китә, янындағы ҡыҙҙар алдында эреләнмәй ҙә. Бая, үҙҙәрен ҡаршылағанда, Салауат менгеһенән төшмәҫ элек үк әле, ҡыҙыҡай ялландыра бер ҡарап алғайны старшина малайына. Ҡабат күҙгә лә элмәне. Ана, тороп ҡалды инде фәрештәләй, ергә төшкән хур ҡыҙылай!

Тәкәй ҡарттың иркен ихатаһы уҫал ыҫылдаған ата ҡаҙы, туйтаң себештәре, сылт аҡ тапсыҡ өйөмдәре, әрселгән бүрәнәләре, ҙур яңы бураһы менән күңелле ҡаршыланы. Йорт соланы ишеге ҡапыл асылып китте лә, унда балҡыу күлдәкле көләс ҡатын күренде. Уңайһыҙлана биреп, ҡулдарын ҡайҙа ҡуйырға белмәй:

— Әссәләмәғәләйкүм! Әйҙүкәйҙүк! — тип саҡырҙы, ҡунаҡтың яуап сәләмен алғас та кире «ялп!» итеп ҡалды.

Салауаттың бында һуғылғаны бар. Һабаҡташының атаһы тәү танышҡанда: «Һин Тәкәйҙән икән, мин үҙем Тәкәй», — тип шаяртҡайны. Бая ла, ҡунаҡтар аттарынан төшкәс, Тәкәй ҡарт менән ҡарсығы Салауатҡа айырым килеп күреште.

Ихатаны үҙ хужалығылай ҡарап сыҡты старшина балаһы, бураны әйләнгеләне.

— Шәп! Һинеңме?

— Миңә инде. Башҡа сығам. Алла бойорһа, көҙгәсә күтәртеп, өрләгән һалып, асамайҙарын торғоҙорға ла ябырға ниәт. Алдағы йыл инелер.

— Һәйбәт, — тине Салауат. Үҙе лә быйыл көҙ Гөлбәзиргә өйләнергә тейешлеген уйлап алды. Бөгөн күргән ҡыҙҙы ла күҙ алдына килтерҙе. Уның хаҡында ҡыймай ине әле, Әбдрәшит тә онотто, өйөнә йәһәтләне. — «Ярар, уңайы тура килер, моғайын да», — тип хужабикә ҡул йыуҙырырға көтөп торған урынға ыңғайланы.

Табында өсәү генә ултырҙылар. Әбдрәшиттең улы Өфө күстәнәсе менән маҡтанмаға тағы бер яй сыҡҡанға урам һыпыртты. Ирҙәр менән бергә ултырырға тейеш булмаған хужабикәгә Салауат ялынды: ҡәйнә-ҡайныһы, бүтән кешеләр юҡлығына баҫым яһаны, үҙенең

Әбдрәшиттән кесе, ә уның еңгәй тура килеүен иң мөһим дәлил итте. Иренең дә ихлас ҡыҫтауы күндерҙе ҡатынды. Тартынынҡыраһа ла, йорт эштәре, мал-тыуар хаҡындағы гәпкә бигүк ҡыҫылмаһа ла, һабаҡташтарҙың Сытырмандағы ҡыҙыҡтарын иҫләгәндә йылмая-көлә һүҙ ҡатыштырып ултырҙы; тора-бара «ҡәйнеш-еңгә» мәрәкәләренә ҡушылып та йорлоғон күрһәтте. Ахырҙа, күҙенән шаян осҡондар сәсеп, иренә өндәште:

— Ҡәйнеште һыу бейәһе итенән ауыҙ иттерәйемме, әләйгәс?

— Һуң, күптән көтәм дәһә сығып әйләнгәненде!

«Аныһы ней икән? Берәй балыҡтымы, һыу ҡошонмо әйтәләрҙер», — тип ҡунаҡ фараз йөрөткәнсә, ҡатын «йылп» килеп тә инде — йәйенке ҡоштабаҡты ашъяулыҡҡа «тып» ултыртты ла. Аҡбалыҡ! Бөтөн килеш ҡыҙҙырылған. Һимеҙлеге һуң!

— Эттә-тә! Ысынлап та һыу бейәһе! — ихлас ҡыуанып һөҡланды Салауат. — Ҡариҙелдәнме?

— Шуна-ан! Ҡайтышлай Богородский кисеүенән өс-дүрт саҡрым түбәнләгәйнек... Әйҙә, етеш!

— Әйтәм, Өфө барғанда һеҙгә тап булманыҡ...

Хәл юҡ — һүҙ ысҡынды, әңгәмә ағышы сараһыҙҙан үҙгәрергә тейеш, тимәк. Әбдрәшит баш баҫты. Салауат шулай ҙа төп хәбәргә күсергә ашыҡманы.

— Ай, еңгә! Изгелеген күреп йәшә ҡулыңдың! Аш-һыуға хәтәр шәпһең! — тип алсаҡ йылмайҙы Салауат, хужабикәгә ҡарап. — Һыу бейәһен бигерәк тәмде ҡурғанһың...

— Рәхмәт! — Ҡатын, ирҙәр хәбәре хәҙер барыбер ҙә мөһим йүнәлешкә тартыласағын аңғарып, һурпа эҫетеүҙе һылтаулап, тегенеһен-быныһын шулай ҙа ҡапҡылай-эскеләй ултырырға ҡыҫтаулап, усаҡлығына сығып китте. Әбдрәшит ашъяулыҡтан ҡырғараҡ шылды, мендәр уңайлап ҡырынланы, ҡунағына ла яҫтыҡҡа терһәкләнергә ишараланы.

— Ништәп купчийҙа һинең ҡултамға беренсе тора, Яхыяныҡы түгел? — тип башланы Салауат.

— Һинең арҡала...

— Бынағайыш! Минең ни ҡыҫылыш?

— Бар шул ҡыҫылышың! Беҙҙең шәриктәш тә, дуҫ та икәнлекте алдын ҡуйып өгөтләнеләр: йәнәһе, старшина бик асыуланмаҫ үҙ балаһы уҙағына. Күҫәктең тәүгеһен кемдең беренсе татыһы килһен... Етмәһә, үҙең беләң — мында беҙ үҙебеҙ айырым улыс булырға тырышабыҙ бит...

— Ә һиңә шуның старшинаһы булырға үгәҙә итәләр, — тип эләктереп алды Салауат.

— Ысынлап та, беҙгә айырылыр кәрәк шайтан-күҙәйҙәрҙән.

— Һеҙ былай ҙа айырым — Ҡобау улысы.

— Аңламағанға һалышма, Салауат! Исемдә айырым йөрөһәк тә гәмәлдә атайыңдың ҡулы аҫтындабыҙ. Аның һүҙе генә һүҙ, аның хөкөмө — хөкөм. Беҙгә үҙ еребеҙгә үҙебеҙ хужа булып йәшәр кәрәк.

— Ергә үҙебеҙ хужа тип, баш күтәрҙегеҙ инде? — тип мыҫҡыллы йылмайҙы Салауат, шунан Әбдрәшитте үртәп дауам итте: — Хужа булдығыҙ ҙа заводсыларға һаттығыҙ инде!

— Урманлы-таулы ерҙәрҙе генә бит...

— Шул ерҙәрҙә ҡорт тотмайһығыҙмы? — Салауат асыулана башланы, ҡалҡынды ла йөгөнөклап ултырҙы, ҡымыҙ менән ирен сылатты. — Һунар итмәйһегеҙме? Утынһыҙ ҙа ҡалырһығыҙ әле!

— Утынлыҡ ҡына урындар күп ул...

— Анау бураңа ағасты утындыҡтан алдыңмы? Анау балаң һинең йәштә башҡа сығам тиһә, ҡаҙаҡ шикелле кәҫтән өйөрмө ҡышҡылыҡ йортон? Заводсылар урманды яғып бөтөр ул йәһәт, шунан тағы һинән, — ошо урында Салауат иренен йәнә мыҫҡыллы салшайтты, — старшинанан — ер һорап килерҙәр...

— Ҡуй әле, Салауат. Беләң бит — шул заводсылар нығ ҡыҫты бит. Ул өфөнөкөләр, ул ырымбурҙыҡылар яҡланы заводсыларҙы. Ҡыш буйы ҡара ҡан ҡаҡшаттылар.

— Ҡыҫалар тип, ихатаңа ла индермәксеһеңме килмешәк-кермешәктәрҙе?

— Туҡта әле, Салауат. Ҡыҙмай тор. Беҙҙең ҡобауҙар ҙа әүәле мал күбәйтмәк хитланған, ләкин йылҡыһы-һыйыры-һарығы көтөүлектәргә һыйышмай икән, мал тояғынан ер арый, ти... Ахырҙа ашлыҡҡа тотонғандар...

— Мин игенселеккә ҡаршымы ней, атаң башы! Мин дә икмәк ашайым. Ана, — тип һыуыныңҡырай биреп дауам итте Салауат, — Уса, Ҡазан даруғалары башҡорттары, Өфө өйәҙе көллөһө тиерҙек аштыҡ үҫтерә. Нуғай даруғаһында ла, беҙҙә лә шөғөлләнәләр. Ҡайҙа уңай — күберәк иген сәсһендәр, ҡайҙа яҡшыраҡ — күберәк мал үрсетһендәр. Хикмәт бит икенселә: ерҙәребеҙ тарая. Ҡобауҙарҙыҡы, шайтан-күҙәйҙәрҙеке, бүтәненеке — тимәк, башҡорттоҡо тарая, бөтәләһә ерҙәре! Беҙ күскенсе йә күсмәнде халыҡ түгел урыҫ үә татар һымаҡ. Уралдан бүтән еребеҙ юҡ иген үҫтерергә, мал үрсетергә, умарта тоторға, һунар итергә, урманынан йә башҡаһынан файҙаланырға...

Салауат тирләне, Әбдрәшит уның алдындағы таҫтамалын алмаштырҙы, уйсанланып әйтеп ҡуйҙы:

— Раҫ һөйләйһең, һабаҡташ, тик...

— Нимәһе «тик»? — тип бүлдерҙе уны Салауат. — Урамда әлегә ғәмһеҙ уйнап йөрөгән, бисәндең бына буйында ятҡан балаларың, ерҙәребеҙҙе һатып-тәләфләп бөтһәк, рәхмәт әйтерме беҙгә киләсәктә?

Әбдрәшит өндәшмәне. Салауат та тымды. Шуны ғына көткәндәй, хужабикә тусҭаҡ күтәреп инде, үҙе хафалы һөйләнде:

— Уй алла, берәр сеүәтә булһа ла һурпа эсеп китегеҙ инде... Самауырым да ҡайнап ҡына ҡалды...

Әбдрәшит ризаһыҙ ҡараны уға:

— Итәгеңә ут ҡапмағандыр, ней ыуаланаң?

— Ыстаршина һеҙҙе йәһәтләй, ти...

Ике ир ҙә бер үк нәмәне уйланы: ер һатыуға бәйле ғауға-янъял ҡупмағайы оло табында ҡапылдан — Хоҙай араалаһын! Ҡабалан һөрпөлдәтеп һурпаны, арлы-бирле һыйпап битте, ҡалҡтылар. Салауат иҙән уртаһында туҡталды.

— Еңгәй, — тине ул, ҡатындың яурынына ҡағылғандай хәрәкәт яһап, — рәхмәтем һиңә әҙерәк тейҙе кеүек. Аш-һыуыңа мас кинәнһәм, күңелең матурлығына мең ҡыуандым. Һин дә кинәнеп-ҡыуанып, балаларыңдың... — Ирекһеҙҙән бисәнең ҡорһағына күҙ төшөрҙө, быныһының йөҙөнә еңелсә ҡыҙыллыҡ йүгерҙе, — ирендең дә ҡәҙер-хөрмәтен күреп, имен-һау йәшә!

Аҙыраҡ атлаңҡырағас, Салауат ҡапҡа тышында балҡып ҡалған ҡатынға боролоп тағы ла йылмайҙы, шунан дуҫына тауыш итте:

— Ҡарале, һин — минән күберәк йөрөгән-күргән-белгән кеше, әйт: ерҙәребеҙҙән яҙа-яҙа, бер мәл етеп, анау урыҫ крәҫтиәне көнөнә ҡалмабыҙ микән үҙебеҙ?

Яуап ҡайтарманы Әбдрәшит, башын баҫҡан килеш уйланып тик барҙы. Уны бүтәнсә борсоманы ҡунағы.

*(Дауамы киләһе һанда)*